ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

6-12 ғинуар (һыуығай) 2018

№1 (783)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Офоғобоҙҙо киңәйтеү кәрәк** 5-6



**Һәйкәлгә лайыҡ шәхестәр:** Усман Ҡыуатов 7



**Эт кеүек тоғро булһаҡ...** йылдарыбыҙ изгелектәр менән бүләкләр 8-9



**Эт тә ғаилә татыулығын яҡлар** 12-13



**Календарь** 14

*Туҡтап ҡал, ашыҡма, кешем. Йәшәйеш - ул бер миҙгел.*
*Ошо миҙгелде үткәреп ебәрмә. Түмен таты, йөмен күр,*
*үҙ йәшәйешеңдең ҡан тибешен аңларға тырыш!*
***Гөлсирә Ғиззәтуллина.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Аҡсаһыҙлыҡ үҙәккә үтте", тигәнде йыш ишетергә тура килә. Ә етеш йәшәү өсөн һеҙ ниндәй аҙым эшләнегеҙ?

**Рәмис ӘЙЮПОВ, шәхси эшҡыуар, Белорет ҡалаһы:** Мин урта статистик кешенең юлын - балалар баҡсаһын, мәктәпте, юғары уҡыу йортон, дәүләт учреждениеһында эшләүҙе - үттем. Белем алған саҡта атай-әсәйемдең тырышлығы менән бер мохтажлыҡ кисермәнем. Уҡып сыҡҡас та эшкә урынлаштым. Ләкин хеҙмәт урынымдың яңғырауыҡлы исеме булһа ла, эш хаҡы таҡы-тоҡо ғына ине. Шулай ҙа бер үҙемә еткерә инем. "Кәләш тә алып ебәрһәм, икебеҙҙең эш хаҡы менән ныҡлап аяҡҡа баҫырбыҙ әле", тип уйлауым елкәгә ҡамыт кейеп, ярты йыл үткәс тә томан һымаҡ таралды. Баҡтиһәң, кәләш тә ашай, кейенә икән. Унан ҡалһа, биҙәнә-төҙәнә һәм башҡа әллә күпме, быға тиклем ишетеп тә белмәгән сығымдар талап итә булып сыҡты. Ә бала тыуғас, аҡса еткерә алмағанлыҡтан бөтөнләй баштар әйләнде. Ярай әле, тыуған ауылыма яҡын ғына ҡалала торабыҙ, атай-әсәй "гуманитар" ярҙамынан өҙмәне. Шуға күрә, кеҫәлә елдәр йыш ҡына уйнаһа ла, өҫтәлдә ашар ризыҡ булғас, үҙебеҙҙе урта хәлләләр иҫәбенә индергән булып, байтаҡ ҡына йәшәп ташланды. Өсөнсө бала тыуыуға атай-әсәй ҡартайҙы, уларҙың беҙҙе түгел, ә беҙҙең уларҙы ҡарар көнөбөҙ етте. Ауылдағы мал-тыуар бөтөрөлөп, тоҡ-тоҡ булып килгән еләк-емеш ағымы туҡтағас, ниһайәт, минең башҡа "әлегә тиклем йәшәгәнсә тормош көтөп булмаясағы" барып етте. Мине атай-әсәйем шул тиклем әпәүләгәндәр, 40-ты аша атлап та уларға күҙ төбәп ятҡанмын. Ояты ни тора!

Ошоно аңлау менән ҡайҙан аҡса табыу, нисек өҫтәмә эш булдырыу тураһында көнө-төнө уйландым. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң ағас эшенә тотонорға ҡарар иттем. Күптән биләп алынған был өлкәлә килемле йүнәлеш тапҡансы, тағы ла арыу ғына ваҡыт үтте. Эште башлап ебәреү өсөн машинаны һатып ебәрергә тура килде. Кәләшкә рәхмәт, бер ҡаршы һүҙ әйтмәне шул ваҡытта, һәр ниәтемде ҡеүәтләп кенә торҙо. Тәүге бура әҙер булғас, уны һатып ебәрә алмай аптырандым. Ҡайһы берәүҙәр йүнһеҙ генә бураларын да "һә" тигәнсә осора. Тимәк, миндә һатыусы оҫталығы юҡ. Шуға күрә, даими ҡайҙалыр тапшырып була торған тауар етештереү хаҡында уйландым һәм таптым. Әлеге мәлдә мин Өфө ҡалаһындағы бер завод менән хеҙмәттәшлек итәм. Уларға төрлө күләмдәге банка, шешә ултыртыу өсөн махсус һауыттар етештерәм. Бының өсөн теге буранан килгән аҡсаға ҡулдан пилорама һатып алдым. Тәүге ваҡыттарҙа минә ҡустым һәм атайым ярҙамлашты. Ә хәҙер эшселәрем бар һәм мотлаҡ эшкә улдарымды ла ылыҡтырам, сөнки аҡса ҡәҙерен белеп үҫеүҙәрен теләйем. Минең тауарыма һорау ҙур, шуға күрә, килем дә бар. Әлеге эшмәкәрлегем бер нисә ғаиләгә мохтажлыҡ кисермәйенсә тормош көтөргә ярҙам итә. Шуға күрә, милләттәштәремә "Эҙләгеҙ юлын, табығыҙ яйын, төрлө юҫыҡта эшләп ҡарағыҙ, тырышҡан үҙ моратына өлгәшә ул", тип әйткем килә. Бай булайыҡ, бар булайыҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

# ӨМӨТЛӨ БУЛАЙЫҠ!



*Яңы йыл көткәндә...*
*Күңелде юйылмаҫ*
*Бер өмөт өткәндә,*
*Сабырлыҡ бөткәндә,*
*Һәм тағы ниҙәндер*
*Ялғанып киткәндә,*

*Килһә йылыма*
*Һыйынам, әйтерһең,*
*Һаҡланып тылыма.*
*Килһә йылыма!*
*Һәм өмөт тағы ла*
*Ҡуйынымда йылына.*

*Яңы йыл яңыртыр:*
*Шиктәрҙе таратыр,*
*Берәһе шаяртыр -*
*Йомарлап ҡар атыр,*
*Ә йөрәк тотор ҙа яратыр,*
*Һәм ерҙә өр-яңы таң атыр!*

*Мөғжизә көткәндә...*
*Иҫкәһе киткәндә,*
*Хис менән тулайыҡ.*
*Йылдары килер ул,*
*Үҙ ғәмен элер ул -*
*Өмөтлө булайыҡ.*

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МӘҘӘНИЛЕККӘ ЫНТЫЛАЙЫҠ!

***Айгөл БУРАНОВА, Ғафури районының "Төлкәç" халыҡ бейеү ансамбле етәксеһе:*** Хәҙер ниндәй мәғлүмәт сығанағын асып ҡараһаң да, кешене уйнап-көлөп йәшәргә, тормоштоң бөтә яҡшылыҡтарын татып ҡалырға, бөгөнгө көн менән торорға кәңәш итеүҙәрен күрәбеҙ. Оло быуын кешеләре әле иртәгәһен ҡайғыртыу ғәҙәтен ташламаһа, йәштәр иртәгәһен ишәк уйлаған, тигән принцип менән йәшәргә күнегеп барған кеүек. Шуға ла бөгөн еңел-елпе, уйын-көлкө, мәғәнәһеҙ күңел асыуға ҡоролған тапшырыуҙар, концерттар, фильмдар күп сығарыла, хатта йөкмәткеһендә бер ниндәй фәһем булмаған китаптар яҙыла. Уйлана китһәң, кеше ғүмер буйы күңел асып ҡына йәшәй алмай, һәм тейеш тә түгел. Уға уйланырға, үҙен йәмғиәткә кәрәкле итеп тойорға, киләсәген хәстәрләргә, ниндәйҙер әһәмиәтле эш менән шөғөлләнергә кәрәк. Шунһыҙ, кешелектең дә, милләттең дә киләсәге ҡурҡыныс аҫтында ҡаласаҡ. Тарих биттәрендә лә бар бындай миҫалдар.

Әйткәндәй, үҙҙәре төшөнөп етмәһә лә, күңеле менән күпселек халыҡ шундай етди, рухи аҙыҡ була торған тамашаларҙы ҡарарға, фәһемле һүҙ һөйләр шәхестәр менән осрашырға ашҡынып тора бит ул. Милли үҙаң уятырҙай, халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен, йолаларын сағылдырған, башҡорт рухы ярылып ятҡан сараларға һыуһап киләләр. Беҙҙең концерттарға ла йөрөйҙәр, балаларҙың халыҡ бейеүҙәрен башҡарыуын ихлас ҡарап, кинәнеп ҡайталар. Сөнки балаларға төрлө халыҡтар бейеүен өйрәткәндә тәү сиратта шул халыҡтың характеры, тормошо, менталитеты тураһында һөйләп, аңлатырға тырышам. Бейеүсе (кескәй булһынмы ул, күптән танылғанмы), шул турала белмәй тороп, бейеүҙе тейешле кимәлдә башҡара алмай. Беҙҙең "Төлкәç" халыҡ бейеү ансамбленә йөрөүселәр тәү сиратта башҡорт халҡының бейеүҙәрен башҡарырға өйрәнә, шунан ғына башҡа бейеүҙәргә күсәбеҙ. Береһен дә иғтибарһыҙ ҡалдырғаным юҡ, төрлө милли бейеүҙәрҙе өйрәнәбеҙ былай. Балалар кеше алдына сығып, сәхнәлә һикереп йөрөнөң дә, шул бейеү сәнғәте икән, тип уйламаһын өсөн бик күп көс һалып, тәү сиратта бейеүҙең, көйҙөң тарихына, милләттең үҙенсәлегенә, йолаларға ҡағылышлы мәғлүмәттәр бирергә тура килә. Әйтергә кәрәк, хәҙер ниндәй генә тема буйынса уҡырға теләһәң дә, интернетта бөтә нәмә бар, ас та уҡы. Ата-әсәләр ҙә бала тәрбиәләгәндә шулай уҡ етдилек күрһәтһен, тарих һәм мәҙәниәткә ихтирам тәрбиәләһен, милләте менән ғорурланырға өйрәтһен ине. Сөнки кеше ниндәй милләттән булһа ла, үҙ халҡының тарихы, сәнғәте, мәҙәниәте менән ғорурланырға тейеш. Бындай тәрбиә биреү өсөн тәү сиратта үҙең рухлы булырға, үҙ өлгөңдә үҫтерергә кәрәк. Ғаилә башлығы телевизорҙан шоу ҡарап ултыра икән, балала нисек юғары мәҙәниәткә ынтылыш барлыҡҡа килһен? Юғары сәнғәтте аңларға, тәрән фекер йөрөтөргә өйрәнәйек, мәҙәни булайыҡ һәм балаларҙы ла ошо рухта тәрбиәләйек, тип әйтер инем милләттәштәргә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### "Аҡсаһыҙлыҡ уҙәккә үтте", тигәнде йыш ишетергә тура килә. Ә етеш йәшәү өсөн һеҙ ниндәй аҙым эшләнегеҙ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Фәнил ТОРОМТАЕВ, кул оҫтаһы, Әбйәлил районы:*** Университетты тамамлағас, ике лә уйламай ауылға ҡайттыҡ. Ҡатыным мәктәпкә уҡытыусы, ә мин ял йортонда һаҡсы булып хеҙмәт юлыбыҙҙы башланыҡ. Кәләш үҙ урынын тапты - эше уға оҡшай. Ә минең күңелдә тынғылыҡ юҡ ине, сөнки, беренсенән, эшемдән ҡәнәғәт түгелмен, икенсенән, аҡса яғы ла наҡыç. Шулай ҙа ауыр уйҙарға бирелмәçкә тырышып, баш баçып эшләүемде белдем. Улыбыҙҙы көткән саҡта ҡыҙыҡ өсөн генә бәүелсәк-карауатты үҙем эшләп ҡарарға булдым. Быға тиклем унда-бында сөй ҡағып, дуç-туғандарға бура күтәрешеп йөрөгәнде һанамағанда, ағас менән әллә ни дуçлыҡ юҡ ине. Төрлө китаптар уҡыным, интернет селтәрендә күп гиҙҙем һәм бисмилламды әйтеп, эшкә тотондом. Тәүге "ҡоймағым" арыу ғына килеп сыҡты, карауат әллә күпме ғиләлә тиçтәләгән баланың беренсе бишеге булып әле лә хеҙмәт итә. Эшләй башлағас та булмышымдың нәҡ ошо эшмәкәрлеккә ылығыуын аңлап, йән тынныслығы таптым. Төп эшемдә тәүлек әйләнәһенә эшләп ҡайтам да, ике көн ялымды тик ятҡан һәм шул уҡ ваҡытта килемле шөғөлөмә бағышлайым. Хәҙер кеше сифаттың өçтөнлөгөн аңланы. Шуға күрә, заказдар ҙа күп. Ә мин иһә бар күңелемде һалып, башҡа берәүҙә лә булмаған әйбер эшләп бирә алыуым менән бәхетлемен.

Ә күптән түгел үҙем өсөн тағы ла бер йүнәлеш астым - ҡапҡа тышына, өй диуарына һүрәттәр төшөрөп тә аҡса эшләй башланым. Матурлыҡ һәр саҡ һоҡландыра, шуға күрә үҙ өйҙәрен күркәм итеп күрергә теләүселәр етерлек.

Шуны әйткем килә. Ниндәй осраҡта ла тормош беҙгә ыңғайлыҡтарын бирә, тик уны күрә һәм аңлай белергә генә кәрәк. Һәләт тә, минеңсә, кешегә тиктән-тик бирелмәй, Хоҙай беҙгә унның ярҙамында яҡшы йәшәү мөмкинлеге аса. Тимәк, барыһы ла, шул иçәптән ғаиләбеҙҙең етеш тормошта йәшәүе лә, үҙебеҙҙең ҡулда. Етешһеҙлек һаҙлығына батмаç өсөн тырыш, сос һәм уяу булайыҡ, йәмәғәт.

***Рәмилә ЗӘЙНУЛЛИНА, хужабикә, Мәләүез районы:*** Өйләнешкәс, оҙаҡ ҡына үҙебеҙгә ҡулайлы йәшәү урыны таба алмай, унда һуғылдыҡ, бында бәрелдек. Өфөлә йәшәп ҡараныҡ, минең тыуған ауылға ҡайтып та ғүмер иттек, Мәләүездә лә тормош көттөк. Ошондай бөтмәç күсенеүҙәр араһында ике ҡыҙыбыҙ донъяға килде. Өсөнсөгә бәпес көткән саҡта ҡайным: "Етер, балалар, сегән һымаҡ йәшәүегеҙ. Ҡайтығыҙ ауылға һәм төпләнегеҙ. Йөрөмәгеҙ ғүмер уҙғарып", - тине. Унның ҡаты итеп әйткән һүҙҙәре беҙҙе уятып ебәргәндәй булды һәм иремдең ауылында йорт һалып сыҡтыҡ. Эш урындары ауылда, тәбиғи, юҡ кимәлдә, шуға күрә мал-тыуар үрсетеп, йәшелсә-емеш үçтерә башланыҡ. Бөгөнгө көндә быҙауҙары менән 6 һыйыр, 8 башмаҡ, 4 ат, 5 дуңғыҙ, тиçтәләгән ҡаҙ һәм өйрәк тотабыҙ. Һыйырҙар һаны даими, уларҙың һөтөн, май-ҡаймағын, ҡорот һәм эремсеген эшләп һатабыҙ. Ә ҡалған мал үҙебеҙгә ҡышын ашарға һәм һатыуға тотонола. Унан килгән аҡсаға тағы ла һатып алып, үçтереп һатабыҙ. Шулай йыл әйләнәһенә. Марттан алып октябргә тиклем шулай уҡ ике тапҡыр бройлер себештәре үçтереп һатам. Емеш-еләктән төрлө ҡайнатмалар эшләп, шулай уҡ һатыуға сығарам. Үҙемдең даими һатып алыусыларым бар, көн аша Мәләүез ҡалаһына йөрөйөм. Ирем бесән эшләгәндә йәки ҡалымда булғанда машина эҙләп йөрөмәç өсөн водитель таныктмаһы алдым. Йәйен һөт һәм һөт аҙыҡтарынан көнөнә 2000-2500 тирәһе аҡса сығарам. Был ҡулаҡсаны әллә ни йыйып булмай, ғаиләбеҙ ҙур булғас, ваҡ-төйәккә китеп тора. Ә өйгә мебель алыу, балаларҙы мәктәпкә әҙерләү, төҙөлөш эштәренә һәм башҡа ошондай оло сығымдарҙы башмаҡ-аттарҙы һатыуҙан килгән килем менән ҡаплайбыҙ. Әйтергә лә түгел, ауыр, әлбиттә. Бигерәк тә йәйгеһен баш күтәрергә лә әмәл юҡ. Ҡыҙҙарға ла эш эләгә. Ләкин тулы тормош менән, мул донъяла йәшәйем, тиһәң, тырышырға тура килә. Ҡыҙҙарыбыҙҙың бала сағын бәхетле итеү, уларҙы бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәйенсә үçтереү беҙҙең бурысыбыҙ. Бәхетле ғаилә - бәхетле илдең нигеҙе. Тырышһаң, ялҡауланмаһаң, матур йәшәп була. Быны мин үҙемдең ғаиләм миçалында әйтә алам.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов 2017-2021 йылдарҙа олимпия, паралимпия, сурдлимпия һәм үçмерҙәр уйындарында, чемпионаттарҙа, донъя һәм Европа беренселегендә призлы урындар алған республика спортсыларын һәм уларҙың тренерҙарын аҡсалата дәртләндереү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Олимпия, паралимпия һәм сурдлимпия уйындарында еңгән өсөн 1,5 миллион һум күләмендә аҡса ҡаралған. Икенсе һәм өсөнсө урын алған спортсыларға иһә 1 миллион 500 мең һум. Үçмерҙәргә - 250 мең һум. Икенсе һәм өсөнсө урындар өсөн 200 һәм 150 мең һум.

✓П. Осипенко урамы буйлап Үҙәк баҙар һәм "Өфө-Арена" боҙ һарайы араһында хәрәкәт ябылды. Был - Цюрупа урамынан алып И. Якутов урамындағы 5-се йортҡа тиклем ҙур булмаған участка. Сикләү боҙ ҡаласығын төҙөүгә, һуңынан унның эшләүенә бәйле, тип хәбәр иттеләр мэриянан. Транспорт хәрәкәте 2018 йылдың 31 ғинуарына тиклем ябыҡ.

✓Өфөнөң "Ағиҙел" муниципаль ҡунаҡханаһы ошо көндәрҙә өç йондоҙлолар рәтен тулыландырҙы. Отелдең категорияһын күтәреү заманса сәйәхәтселәрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә һәм Рәсәйҙең туриндустрияһы сифатын күтәреүгә йүнәлтелә. "Ағиҙел" баш ҡаланың иң оло ҡунаҡханаларының береһе. Ул инде 40 йылдан ашыу ҡунаҡтарҙы ҡолас йәйеп ҡаршылай. Уңайлы һәм матур урында урынлашҡан булыуы ла уны ылыҡтырғыс итә. Бөгөн ул Европа стандарттарына тап килә һәм 150 кешене ҡабул итергә әҙер.

✓"Рәсәй-1. Башҡортостан" каналында "Ислам Нуры" тигән дини рубрика сыға башлай. Ул һәр йома иртәнге сәғәт 9-ҙа сығасаҡ, тип хәбәр итте телеканалдың матбуғат секретары Наталья Агрова. "Ислам Нуры" рубрикаһында ислам дине хаҡында мөһим һәм дөрөç мәғлүмәт - йолаларҙың, дини ғөрөф-ғәҙәттәрҙең аңлатмаһы, мәҙәниәт һәм дин ғилеме менән таныштырыу тәҡдим ителә.

✓Донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы Роберт Заһретдиновҡа (үлгәндән һуң) Рәшит Әхтәри исемендәге премия тапшырылды. Премия яҙыусылар, шағирҙар, журналистар, композиторҙар, фольклорсылар, тарихсылар, рәссамдарҙың йәмәғәтселектә танылыу алған юғары художестволы әçәрҙәре өсөн тапшырыла. Роберт Заһретдинов ошо премияға лайыҡ булған унынсы кеше.

✓ Йәштәр Бөтөн донъя студенттар көнө сараларында ихлас ҡатнашыр. Был уларға, бәлки, Халыҡ-ара интернетһыҙ көндөң буш ваҡытты нисек итеп файҙалыраҡ үткәреүгә булышлыҡ итеүен аңларға бер сәбәп тә булыр.



БЫЛ АЙҘА...

# ҠАЙНАР КҮҢЕЛЛЕ, ӘҮҘЕМ БУЛ!

**Йыл башлауы, ҡыш уртаһы, ҡос-ҡеүәт туплап, ял итеп ала торған йәмле ай - һыуығай килеп ишек ҡаҡты. Халыҡ телендә һыуығай тип йөрөтөлһә лә, Яңы йыл байрамдары, ябалаҡ ҡарҙары, оҙайлы ялдары менән күңелгә бик тә йылы һәм күңелле ай бит ул ғинуар. Бала-сағаның сыр-сыу килеп һырғалаҡ шыуыуы, көн оҙоно боҙҙа елдереп, хоккей уйнап мәж килеүҙәре генә ни тора!**



Һауа торошона килгәндә иһә, уны алдан фаразлау, үткән күҙәтеүҙә әйтелгәнсә, хәҙер файҙаһыҙ ғәмәл, сөнки климат күҙ алдында глобаль үҙгәрештәргә дусар ителә һәм күп йыллыҡ фенолог тәжрибәһе юҡҡа сыға бара. Һауа торошо карталарына ҡарап, метеорологтар шулай ҙа ниндәйҙер фараздар ҡоршарға батырсылыҡ итә, ләкин төрлө сығанаҡтарҙа прогноз төрлөсә килеп сыға. Әле лә ғинуарҙа уртаса айлыҡ һауа температураһын берәүҙәр минус 15 градус тирәһе (төндә -22-25) булыр, тип тоҫмаллаһа, икенселәре уның 2-3 - градусҡа түбәнерәк төшөүен күҙаллай. Халыҡ барыбер ҙә юҡҡа ғына һыуығай тип әйтмәҫ ине шулай ҙа был осорҙо. Ай урталары һәм ахырғы бер нисә көндә, ысынлап та, бер аҙ һыуытып алыуы ла ихтимал - ни тиһәң дә, ҡыш уртаһы бит. Метеорологтар был айҙың нигеҙҙә болотло көндәрҙән тороуын, шулай ҙа ҡарҙың аҙыраҡ яуасағын да иҫкәртә. Был раҫҡа сыҡһа, декабрҙең холҡона ҡарап, быныһы бер ҙә көтөлмәгән йә ғәжәп булмаҫтыр, шәйт: һауа "көнсәләре" ҡар яуҙырыу буйынса былтыр планды арттырып үтәп ташланы бит, быйыл мөсһәҙәрәк булһа ла үпкә юҡ. Йә, ярай был турала ләстит. Һау йәшәйек, унышлы булайыҡ - һауа торошоноң теләндә ниндәйенә лә шат һәм разый булырбыҙ шул саҡ.

Күҙ һалайыҡ: ай календары низәр һөйләй? Яңы йыл байрамдары (**1-8**) быйыл теүәл 10 көнгә һуҙылһа ла, был бот күтәреп, ашап-эсеп ятыуҙы аңлатмауын яҡшы аңлау фарыз һәммәбеҙгә. Республика буйынса Ғаилә йылы башланып ҡына торғанда, ата-әсәләргә балалары менән бергәләп ял итеү өсөн ҡасан тағы шундай форсат була! Каникул көндәрен ғаилә менән бергә саңғы, сана, боҙ шыуып, баш ҡалабыҙ Өфө шыршыһына, республика туризм һәм һауыҡтырыу үҙәктәренә ҡышҡы сәфәргә юлланыу онотолмаҫ тәьҫораттар бүләк итер, сәләмәтлекте нығытыр. Айҙың ғына түгел, йылдың тәүге көнө Бөтөн донъя тыныслыҡ (тыныслыҡ хаҡына доға ҡылыу) көнө лә икән. Календарҙа бик йыш билдәләнә тыныслыҡ көндәре (Халыҡ-ара, Бөтөн донъя, Ҡатын-ҡыҙ - тыныслыҡ өсөн һ.б.), тик тормошта ғына уға урын юҡ: атыш, үлтереш, шартлауҙарҙың бер генә көнгә булһа ла тынып торор сағы булырмы? Әйткәндәй, тыныс киләсәк, тыныслыҡ һөйөүсе быуын тәрбиәләү өсөн Балалар киноһы көнө (**8**) тос өлөш индерер ине, моғайын, тик әлегә улар бирелеп китеп, көндәр буйына компиктарында һуғыш, үлтереш уйнай. Ә инде, халыҡ әйтмешләй, уйындан уймаҡ сығарыуға күп тә кәрәкмәй. Балалар өсөн йүнле фильмдарҙың булмауы ла ҙур проблема, әлбиттә. Американың "Один дома"-һы менән Гарри Поттер мажараларын күпме ҡарарға була! Үҙебеҙҙең Рәсәй фильмдары һәм мультфильмдары кәрәк! Календарь көнө (**8**) лә йыл тыуған осорҙа билдәләнә. Ул ай һайын беҙҙә иҫтәлекле даталар менән таныштырып барасаҡ, тик ана шул календарь битендәге бихисап байрам һәм даталарҙың күпселеген кеше белеп тә бөтмәй, уға уларҙың кәрәге лә юҡ, күрәһең. Юғары органдар, БМО тибындағы олпат учредителдәр тарафынан ниндәйҙер маҡсат менән ниндәйҙер даталар булдырылған икән, ниңә ул турала киңерәк йәмғәтселеккә мәғлүм түгел һуң улар? Ниңә теге йә был мөһимерәк датаны билдәләү, байрам итеү положениеһын үтәү талап ителмәй? Исмаһам, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, вуздарҙа, мәҫәлән? Аҙ ғына булһа ла белемдәрен арттырыр, мәғлүмәт даирәләрен киңәйтер ине был йәш быуындың.

Миҫалға Ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар көнөн (**11**) алайыҡ. Башҡортостаныбыҙҙа ғына ла күпме улар! Берененән-берене мөһимерәк, гүзәлерәк, байыраҡ был тәбиғәт ҡомартҡыларының. Шуларҙы иҫәпләп булһа ла сыға аламы һәммәбеҙ? Әллә... Ә бына Бөтөн донъя "рәхмәт" көнөн (**11**) ниндәйен дә әһәмиәтле тәрбиәүи сара булараҡ файҙаланырға мөмкин! Халыҡтың күпселеге гәзит-журнал, китап уҡыуҙы тамам оноҡҡас, Рәсәй матбуғат көнө (**13**) лә етемһерәп ҡалды, буғай... Әлеге мәктәп балаларына Рәсәйҙәге ҡышлаусы ҡоштар көнөн (**15**) нисегерәк ҡыҙыҡлы итеп ойоштороорға йә асыҡ һауала дәрес үткәрергә бер форсат тыуа был көндәрҙә. Әлбиттә, мәктәп, балалар баҡсалары, йорт алдары территорияларындағы ағастарға элеп ҡуйылған тағараҡтарҙы йыш күреп һөйөнөргә тура килһә лә, иманым камил, балаларыбыҙ ҡышларға ҡалыусы сыҙам, батыр ҡошсоҡтарҙан ни бары бүҙ турғай менән әрһеҙ ҡүгәрсен һәм ҡарғаны ғына атай аласаҡ. Ә бит урамда түгел, урманда ҡышлаусылары ысын батыр бит уларҙың. Шуға ла урман ҡоштары хаҡында видео күрһәтеп, уларҙың тауыштары - һайраған яҙмаларын тыңлатып, ҡыҙыҡлы дәрес үткәреү, ә ауыл ерендә хатта тәбиғәткә сығып килеү ҙә шәп буласаҡ ошо датаға арнап. Был ай календары, әйтерһең дә, оҙайлы каникулдар айҡанлы махсус балалар өсөн генә төҙөлгән кеүек. Илдә һуңғы ваҡыт Балалар уйлап табыуҙары көнөнә (**17**) айырым иғтибар бирелә башлауы шатландыра. Мәҫәлән, Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙ башланғысы менән Сочиҙа "Сириус" талантлы балалар техник ижад үҙәген ойоштороп, уға исемде лә хатта үҙе уйлап ҡушты һәм уның эшен даими хәстәрлек менән солғаны. Һәләтле балалар менән эш мәсьәләһе Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың да быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә мөһим темаларҙың береһе булараҡ яңғыраны һәм балаларҙы яңы ылыҡтырыу урындары - кванториумдар, технопарктарҙың йәш быуынға белем биреүҙәге яңы мөмкинлектәрен билдәләнә. Йәштәр Бөтөн донъя студенттар көнө (**25**) сараларында ихлас ҡатнашыр. Был уларға, бәлки, Халыҡ-ара интернетһыҙ көндөң (**28**) буш ваҡытты нисек итеп файҙалыраҡ һәм әүҙемерәк үткәреүгә булышлыҡ итеүен аңларға бер сәбәп тә булыр. Ҡыҫҡаһы, яңы йылдың тәүге көнөн һәм айын нисек үткәрәһең, тотош йылың да шулай булыр, тигән ырымға ышанып етмәгән һүрәттә лә, Эт йылында эт күнелен күрергә тырышырға тура килер. "Эт күнеле - бер һөйәк" тигәндә лә онотмайыҡ, йәмәғәт.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1** - Бөтөн Рәсәй күҙ һәм пластик хирургия үҙәге директоры, медицина фәндәре докторы, профессор **Эрнст Мулдашевҡа - 70 йәш** (1948).

- Яҙыусы, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Әмир Әминевҡа - 65 йәш** (1963).

**2** - Прозаик, драматург, шағир, тәржемәсе, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы **Зәйнәб Биишеваның тыуыуына - 110 йыл** (1908-1996).

- Башҡортостандың халыҡ артисы, Өфө сәнғәт училищеһының вокал сәнғәте кафедраһы доценты **Тәнзилә Үҙәнбаеваға - 65 йәш** (1953).

**10** - Хирург, дәүләт эшмәкәре, 1919-1928 йылдарҙа БАССР Һаулыҡ һаҡлау буйынса халыҡ комиссары **Ғүмәр Ҡыуатовтың тыуыуына - 135 йыл** (1883-1946).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Австрияның Обертиллиах ҡалаһында Башҡортостан биатлоны тәрбиәләнеүсеһе Эдуард Латипов Рәсәйҙең милли йыйылма командаһы составында IBU кубогының өсөнсө этабында көмөш миҙал яуланы.

✓Өфөлә коммуналь фатирҙар бер йыл эсендә 3,5 процентҡа осһоҙланған. Башҡортостандың баш ҡалаһында бүлмәнең уртаса хаҡы - 1 миллион 63, мең һум. Иң ҡиммәт коммуналь фатирҙар Мәскәүҙә - уртаса хаҡы 2,9 миллион һум. Сочиҙа бүлмәләр 2,7 миллион. Питерҙа коммуналь фатирҙар уртаса 1,7 миллион тора, шул уҡ ваҡытта уларҙың күбеһе йорттар нык туҙған иҫке райондарҙа урынлашҡан. Иң арзан бүлмәләр Ижевскиҙа, Магнитогорскиҙа, Түбәнге Тагилда, Череповецта - 500 мең һумдан артыҡ түгел.

✓Былтыр йәй Өфөлә "ВДНХ-Экспо" күргәҙмә комплексында "Рәсәй - минең тарихым" тарихи парк асылғайны. Башҡортостан Мәскәүҙән һуң беренсе ҙур мультимедиалы музей. Тарихи паркка яҡынса 500 берәмек мультимедиалы техника инә. Был күргәҙмәнең Рәсәйҙең Рекордтар китабына инеүе ихтимал. Мультимедиалы тарихи экспозицияның иң ҙур дөйөм экрандар майҙаны исеменә ғариза тапшырыу өсөн уны баһаларға тип республиканың баш ҡалаһына Китаптың баш мөхәррире Станислав Коненко килде.

✓Танылған актер һәм режиссер Александр Галибин Башҡортостанда Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы буйынса фильм төшөрә. Проекты Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы 90 миллион һумға финанслай. Төбәк продюсеры Азамат Тимерғәзин хәбәр итеүенсә, фильмды 2018 йылдың ғинуарында Белорет һәм Бөрйән райондарында төшөрә башлау күҙаллана. Фильмды башҡорт телендә сығарыу ҡаралған. Кинотаҫманы "Мотор-фильм" студияһында төшөрәләр.

✓Стәрлетамаҡта ҡалала тәүге Хушлашыу йортон асыу күҙаллана. Махсус урын мәрхүм менән туғандарының һәм яҡындарының хушлашыуы өсөн тәғәйенләнә. Карл Маркс урамы, 126 адресы буйынса бина ла һайланған. Зал мәрхүмдең диненә һәм туғандарының теләгенә ҡарап тейешенсә биҙәлә. Хушлашыу сараһын үткәрергә ойоштороусы ярҙам итәсәк.

**"Башинформ"дан.**

БАШ ҠАЛАМ

# РЕКЛАМА КҮП...
## әммә мөһимдәренә урын юҡ

**Өфө күҙ менән ҡаш араһында үҙгәрә. Бынан ун йыл элекке Өфөнө бөгөнгө менән сағыштырып та булмай. Уҡыу йортон тамамлағандан һуң, быйыл беренсе тапҡыр баш ҡалаға килергә насип итте. Үҙгәрештәр иҫ китерлек! Өфөнө тәүгә күргәндәй ҡарап йөрөнөм. Тәьҫораттарым менән бүлешергә булдым.**

Студент саҡта иң яратмаған күренеш - ҡала буйлап теҙелгән эреле-ваҡлы кафелар ине. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ, һәр урамда тиерлек төрлө ҙурлыҡтағы сатырҙар урынлаштырып, һыра менән һатыу итеүсе был кафелар Өфөнөң бөтә йөҙөн йәмһеҙләп торҙо. Ә хәҙерге Өфө был күренештән азат икән, Аллаға шөкөр. Шуныһы ҡыуаныслы. Булғандары ла күҙгә ташланып тормай. Ләкин уның ҡарауы, һыраһы ҡойоп һата торған урындар күбәйеп киткән. Уларын да төбө-тамыры менән юҡ итеү, бик булмаһа, кәметеү юлдарын эҙләп табырға кәрәк.

Элекке бәләкәй генә магазиндар урынына ҙур-ҙур сауҙа үҙәктәре барлыҡҡа килгән бөтә ҡала буйлап. Унда инеп китеп аҙашып та ҡуйырға мөмкин. Сағыу витриналы, төрлө төҫтәр менән уйнаған ҙур магазиндар матур, әлбиттә, ләкин был гиганттар бәләкәй генә магазиндарҙы "йотҡан". Икмәк-һөт кенә алып сығыр өсөн дә күп ваҡытыңды юғалтып, гипермаркеттың ҙур майҙанын урап сығырға тура килә. Ә көндәлек кәрәк аҙыҡ-түлек, гәҙиттә, магазиндың иң төпкө бүлегендә урынлаша. Унда барып, кире кассаға килгәнсе, ҡулда кәрәк-кәрәкмәгән әллә күпме тауар пәйҙә була. Кеҫәгә һуға был супер- һәм гипермаркеттар, әйтәһе лә түгел.

Ә ҡунаҡханалар һуң! Ниндәйе генә юҡ! Уларҙың һанына ҡарап, Өфө ҡунаҡтарҙан бушамай икән, тиғән һығымтаға киләм. Етмәһә, был ҡунаҡханаларҙың, башлыса, ҡала үҙәгендә ҡалҡып сығыуы ла аптырата. Мин уҡыған саҡта уҡ әле ҡала үҙәгендә биналар бик тығыҙ урынлашҡайны, ә хәҙер шулар янында тағы ла ҙурыраҡтары төҙөлгән. Ер һуҙыламы икән әллә был урындарҙа, тип аптырарға ғына ҡала. Донъя кимәлендә танылыу яулаған ҡунаҡханаларҙың асылыуы шәп, әлбиттә, ләкин минең кеүек ауылдан килгән ябай агрономға унда тукталыр мөмкинлек юҡ. Хаҡтары хәтәр тешләшә. Ә шуларҙың береүһе урынына, исмаһам, бер кис йоҡлап сығырлыҡ унайлыҡтары булған, кеҫәгә һуҡмаған бәләкәй генә ҡунаҡхана төҙөгәндә, үҙен күпкә аҡлар ине. Өфөлә барлыһын да туғаны юҡ, ә төрлө йомош менән баш ҡалаға юл төшөп кенә тора.

Ниндәй ҡалаға барһаң да, тәү сиратта, юлдарҙы күҙҙән үткәрәһең. Өфөлә лә, башҡа күп ҡалаларҙағы кеүек үк, был йәһәттән етешһеҙлектәр бар. Айырыуса үҙәктән ситтә ятҡан урамдарҙа тиҙ арала төҙәкләндереү эшен башлау ҡамасау итмәҫ ине. Ләкин юлсыларҙың тегендә-бында эшләп йөрөүҙәрен күреп, хәлдәр бик үк хөрт түгел икәнлеген аңларға мөмкин. Тимәк, тырышалар ҡаланың йөҙөн яҡшыртырға, Өфө халҡына һәм ҡунаҡтарға унайлыҡтар булдырырға. Афарин, тиергә генә ҡала.

Реклама Өфөнө лә "баҫҡан". Уларҙың ниндәйе генә юҡ, әммә шулар араһында социаль рекламаға урын аҙ бирелгән. Былтыр илдә Экология йылы булды. Ләкин Өфө буйлап күпме уҙҙым, ошоға бәйле реклама стендтарын осратманым. Беҙҙең тереклек өсөн мөһим факторҙарҙың береһе булған экологияны һаҡлау тураһындағы реклама бөтә урында ла "ҡысҡырып" торорға тейеште, тип уйлайым.

**Рәсүл ҒӘЛИМОВ.**
**Йылайыр районы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЫЛ ЮЛЫ ЛА АЛДАБЫҘ

**РФ Федерация Советында Рәсәй ҡалаларының "Ғаилә һәм ҡала - бергә үҫәбеҙ" конкурсы еңеүселәре һәм призерҙары тәбрикләнде. Унда Өфө ҡала хакимиәте башлығы Сынтимер Баязитов ҡатнашты.**

Конкурс комиссияһы йомғаҡтары буйынса, Өфө "Конкурстың оҙаҡ йылдар уңышлы лидеры" номинацияһында билдәләнде. Бынан тыш, Сынтимер Биктимер улына РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы Рәйесе В. Матвиенконың Рәхмәт хаты тапшырылды.

Йыл дауамында муниципаль берәмектәр ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләр һәм балалар менән комплексы эшләүгә, ғаиләләргә һәм балаларға ярҙам итеүгә, балалар тәрбиәләү өсөн имен ғаилә мөхите булдырыу һәм ошо именлекте һаҡлауға иғтибар йүнәлтеп, еңеүсе исеме өсөн көрәштә. Конкурста ҡатнашыусылар төрлө эштәр башҡара, акциялар уҙғара, бынан тыш, Феодосияла Ҡалалар араһындағы конкурста ҡатнашыусыларҙың осрашыуында, Мурманскиҙа Бөтә Рәсәй күргәҙмә-форумы майҙансыҡтарында үҙ муниципалитеттарын күрһәтә.

Тантанала Федерация Советының вице-спикеры Галина Карелова киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап: "Ҡатнашыусылар балаларҙың имен булмаған тормошон профилактикалау, уларҙың ялын ойоштороу өсөн инфраструктура булдырыу, үҙ-ара ғаилә ярҙамының төрлө формаларын үҫтереү буйынса күп эшләгән. Конкурсҡа ауыл биләмәләренең ҡушылыуы ла ҡыуандыра", - тине.

# КҮҢЕЛЛЕ ЯЛ ИТӘБЕҘ!



**Ҡышҡы каникулдар ваҡытындағы Яңы йыл сараларында 175 мең йәш өфөлө ҡатнашасаҡ. Уларҙы шыршы байрамдары, ярыштар һәм конкурстар, сағы походтары һәм экскурсиялар, түңәрәктәрҙә һәм секцияларҙа шөғөлләнеү көтә. Бындай программа уҡыусыларҙың үҙҙәренең теләге һәм ата-әсәләрҙең һорауы буйынса төҙөлгән.**

Әлеге ваҡытта белем биреү учреждениелары территорияһында 20 хоккей ҡумтаһы бар. Туризм-крайҙы өйрәнеү йүнәлешле учреждениелары 200 сара - ҡаланан ситтә сағылға йөрөү, Башҡортостандың һәм Силәбе өлкәһенең балалар туристик үҙәктәрендә, базаларында күп көнлөк 30 поход - ойошторорға ниәтләй

Икенсе йыл рәттән "Өфө - яратҡан ҡалам" ҡала программаһы тормошҡа ашырыла. Уның сиктәрендә балаларҙа илһөйәрлек, тыуған ҡалаң өсөн ғорурлыҡ, уның мираҫына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүгә йүнәлтелгән төрлө саралар уҙғарыла. Был эш ҡышҡы каникул осоронда ла дауам итә: "Аҡ Өфө", "Көмөш ҡар бөртөгө" декоратив-ҡулланма ижад, "Ҡышҡы Өфө" фотографиялар конкурстары үткәрелә. Шулай уҡ төрлө экскурсиялар, "Рәсәй - минең тарихым" интерактив тарихи мультимедиа паркына сәйәхәт ойоштороla, уҡыусылар әҙерләгән тарихи-мәҙәни проекттар тормошҡа ашырыла. Каникул ваҡыттарында балалар йомғаҡ берекмәләре һәм ойошмалары менән дә эш алып барыла. "Рәсәй уҡыусылары хәрәкәте" сиктәрендә лидерҙар өсөн "Балалар активының идара мәктәбе" йыйыны ойоштороласаҡ, унда 7-11-се синыф уҡыусылары ҡатнашасаҡ. Шулай уҡ һәләтле балаларҙы уҡытыусылар 25-30 ғинуарҙа үтәсәк XXII ҡала фәнни-ғәмәли конференцияһына тикшеренеү проекттарын яҡлауға әҙерләйәсәк.

Юғары синыфтарҙа уҡыусылар тарафынан социаль яҡтан яҡланмаусыларҙы социалләштереүгә йүнәлтелгән проекттар әҙерләнә һәм тормошҡа ашырыла. 20 декабрҙән 10 ғинуарға тиклем улар ирекмәндәр менән бергәләп "Изгелек эшлә" тип аталған мәрхәмәтлек акцияһы ойоштороп, дауаханаларға, мәктәп-интернаттарға, аҙ хәрәкәтләнгән балаларға, ҡарттар йорттарына, ветерандарға барасаҡ, театрлаштырылған тамашалар ҡуя. Каникул ваҡытында социаль хәүеф төркөмөндәге балалар ҙа иғтибар үҙәгендә буласаҡ. Уларға төрлө түңәрәктәргә, спорт залдарына йөрөү мөмкинлеге биреләсәк. Был төркөмдәге һәр балаға педагогкуратор билдәләнгән. Дөйөмләштереп әйткәндә, ҡышҡы каникулдарҙа барлығы 3 мең самаһы түңәрәк һәм секция эшләйәсәк. Шулай уҡ ҡышҡы оҙайлы ялдарҙа сәләмәтлегендә ныҡытырға ла мөмкин. Ата-әсәләрҙең ғаризаһы буйынса 200-ҙән ашыу бала һәм үҫмер балалар шифахаланаларына һәм шифахана-һауыҡтырыу учреждениеларына, лагерҙарға барасаҡ.

# ЮЛ БИЛДӘЛӘРЕ - ҠОЙМАЛА



**Биналарҙа һәм ҡоймаларҙа юл билдәләрен ҡуйырға рөхсәт иттеләр. Ул яңы милли стандарттар менән ҡаралған. Һүҙ тик парковка билдәләре хаҡында бара.**

2020 йылдың 1 ноябренә тиклем иҫәпләнгән милли стандарт тәбәктәргә юл билдәләренең бер өлөшөн ҡоймала һәм бина диуарҙарында урынлаштырырға рөхсәт итә. Һүҙ ете парковка билдәһен яңы төрҙә башҡарыу (хәрәкәт зонаһын асыҡлаусы уҡтар менән) тураһында бара. Уларҙың дүртәүһе - "Туҡтау тыйыла", "Туҡталҡа тыйыла", "Айҙың таҡ көндәре буйынса туҡталҡа тыйыла" йәки "Йоп көндәр буйынса туҡталҡа тыйыла". Милли стандарт был билдәләргә сикләү зонаһын билдәләүсе уҡтар ҡуйырға рөхсәт итә. Нәҡ шундай рәүештә уларҙы бина диуарҙарына һәм ҡоймаларға ҡуйырға ярай. Бындай яңылыҡ өс парковка (түләүле һәм бушлай) йүнәлеше билдәһенә ҡағыла - яңы стандарт водителдәргә унайлы булһын өсөн уларға уҡтар өҫтәне. Алдан юл билдәләрен Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Владимирҙа һәм Һарытауҙа һынау үткәреү сифатында бина диуарҙарына ҡуйҙылар. Баш ҡала бындай һынау проекты 2015 йылда уҡ эшләй башланы. Ул саҡта транспорт власы һынау өсөн билдә бағаналары йәйәүлеләргә ҡамасаулаған тар урамдарҙы һайлағанын хәбәр иткәйне. Рәсәй стандартынан хәбәр итеүҙәренсә, милли стандарт ғилми-тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләрен тиҙ индереү (дәүләт стандартын ҡабул итеү оҙағыраҡ дауам итә) һәм талаптарҙы ғәмәлдә тикшереү мөмкинлеге бирә. Милли стандартты ҡулланыу һөҙөмтәләре буйынса тупланған мәғлүмәт нигеҙендә артабан Рәсәй милли стандарты әҙерләнә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Белорет районында рәсми рәүештә "Урал батыр" радио башняһын астылар. Уны кәрәҙле операторҙар үҙ станцияларын ҡуя алһын һәм тирә-яҡ биләмәне, шул иҫәптән "Ирәмәл" тәбиғәт паркын элемтә менән тәьмин итеү өсөн "СпутникТелеком" компанияһы төҙөнө. Башняны МТС һәм "Мегафон" элемтә операторҙары ҡуртымға алған да инде. Ул 30 саҡрымды ҡаплай. Белорет районының Николаевка, Мәхмүт, Черный ключ ауылдарында йәшәгән халыҡ, ниһайәт, мобиль элемтә менән ҡуллана ала. Башня тауҙың төньяҡ битен элемтә менән тәьмин итмәй.

✓Башҡортостанда гәзит-журнал киосктарында һатылған тауарҙар исемлеге үҙгәрҙе. Ошо үҙгәрештәргә ярашлы, тауарҙар исемлегенә көнкүреш химияһы, шулай уҡ шәхси гигиена, бөжәктәрҙән һаҡланыу саралары, парфюмерия-косметика продукцияһы инә.

✓Дәүләт Думаһы торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү квитанцияларында рекламаны тыйыу тураһында закон ҡабул итте. Документҡа аңлатмала билдәләнеүенсә, түләү документтарында реклама мәғлүмәтенең күп булыуы тураһында халыҡтан байтаҡ ялыуҙар килгән. Депутаттар фекеренсә, квитанцияларға реклама граждандарға приборҙарҙың күрһәтмәһен һәм түләү суммаһын ҡарағанда ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Хәҙер түләү ҡағыҙында реклама булырға тейеш түгел.

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Халыҡтың һаулығын тәмәке төтөнө йоғонтоһонан һәм тәмәке тартыу эҙемтәләренән һаҡлау тураһында" законға төҙәтмәләр әҙерләгән. Был акция тәмәкене рекламалауға ҡаршы көрәш булараҡ ҡаралған. Йәмәғәт урындарында тәмәке тартыуҙы тыйыу тәжрибәһе киңәйә. Атап әйткәндә, коммуналь фатирҙа тәмәке төтәтеү тыйыла. Бынан тыш, йәмәғәт транспорты туҡталыштарында тәмәке ҡулланырға ярамай. Тәмәке тартыусылар "сауҙа бинаһына ингән ерҙән" өс метр алыҫҡа китергә тейеш.

✓Былтырғы йылдың 1 октябренә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда пенсия түләүҙәренең уртаса күләме 12 371,7 һум тәшкил итте, тип хәбәр итә республика буйынса Федераль дәүләт статистика хеҙмәте. 2016 йылда уртаса пенсия 11 812 һумға тиң ине. Шулай итеп, ул яҡынса 5 процентҡа артҡан. Әлеге ваҡытта төбәктә 1,17 миллион пенсионер йәшәй, былтыр уларҙың һаны 1,154 миллион кеше булған.

ӨФӨ БАШҠОРТО

# ОФОҒОБОҘҘО КИҢӘЙТЕҮ КӘРӘК



**Кемдер был тормошта инде тапалған бер юлға төшөп ала ла, башын баҫып, ян-яғында нимә барғанын да белмәй ҙә, күрмәй ҙә, ғүмер ахырынаса шул бер һуҡмаҡты тапай ҙа тапай. Ә ул, киреһенсә, һәр яңылыҡты үҙе һынарға, тормоштоң уртаһында ҡайнарға һәм ҡыйыу фекерҙәрен әйтеп кенә ҡалмайынса, уларҙы үҙ елкәһендә татып ҡарарға ынтылыуы, заман менән бер ҡатарҙан атлауы, шул уҡ ваҡытта милләт яҙмышын иңендә йөрөтөүе менән айырылып тора. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - креатив ҡарашлы журналист, күп балалы атай, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында "Йәшлек" гәзите мөхәррире булып эшләгән Артур ИҘЕЛБАЕВ.**

**➔ Бөгөн телебеҙгә "Өфө башҡорто" тигән һүҙбәйләнеш килеп инде. Был категорияның төп сифаттары нимәлә һәм нисек сағыла?**

- Иң тәүҙә Өфө башҡорттары төшөнсәһенә кемде индерергә икәнлеген асыҡлайыҡ: юғары уҡыу йортон тамамлап, баш ҡалала эшләргә һәм йәшәргә ҡалып, өйләнеп, бында тамыр йәйгән кешеме; ниндәйҙер сәбәп менән Өфөгә башҡа ерҙән күсеп килеп, йәшәп-эшләп ятыусылармы; әллә баш ҡалала тыуып, бында икенсе йә өсөнсө быуын булып йәшәүселәрме? Был өс төркөмдөң сифаттары төрлөсә. Тәүге икеһенең башҡа башҡорттарҙан бик айырылып торған сифаттары булмаһа, өсөнсөһөнөкө иһә донъяға ҡарашынан башлап, һөйләшеүҙәренә тиклем икенсерәк. Ҡалала тыуып-үҫкән башҡорттар туған телдә тап-таҙа әҙәби телдә һөйләшә, диалектизмдар ҡушмай. Уның өсөн, мәҫәлән, "Бөрйәнем - йәнтөйәгем" тигән төшөнсә юҡ. Уның өсөн тотош Башҡортостан - ватан. Ҡараш офоғо - киңерәк.

Мин үҙем ошо өсөнсө төркөмгә ҡараусыларҙың бер вәкиле. Билдәле ғалим, яҙыусы, филология фәндәре докторы Мирас Иҙелбаев менән журналист, шағирә Гөлфиә Юнысова ғаиләһендә тыуып та, әлбиттә, ҡустым менән минә бала саҡтан башҡорт мөхитендә, әҙәбиәт, мәҙәниәт, тарих даирәһендә ҡайнап үсмәү мөмкин дә түгел ине. Был беҙҙең артабанғы яҙмышыбыҙға ла, ижад юлыбыҙға ла үҙ йоғонтоһон һалмай ҡалмағандыр, моғайын. Бөгөн Урал - танылған композитор, ә мин, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлаһам да, хеҙмәт юлымды республика матбуғаты менән бәйләп, оҙаҡ йылдар ошо тармаҡта эшләнем.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ӘЙТӘГҮР!

# ХАЛЫҠ ЯЛҠАУЛАНА БАРА...



**Былтыр ҡыш бер-ике тәүлектә яуған ҡар ҡалала хәрәкәтте ауырлаштырып, барыһы ла ҡала хакимиәте башлығын һүккәйне. Киң мәғлүмәт сараларынан да кире мәғлүмәт яуҙы, әммә күптәр ғәйепләне эҙләүҙән ары китмәне.**

Быҙдай һөйләнеүҙәр мине һәр саҡ аптырата. Мин үҙем ҡар яуғанын көтөп йөрөйөм дә, ҡар яуһа, саф һауала тәндәрҙе яҙып, рәхәтләнеп ихата таҙартам. Ҡышын йүгерге килмәй, һыуыҡ, ә бына ҡар яуһа, кискеһен, үҙ машинамдың эргәһен генә түгел, эргә-тирәне көрәп сығам. Күршеләрем "Нимәгә кәрәк ул һиңә?" тип аптырай. Организмға физик көсөргәнеш етмәй, организм эш талап итә, тием. Ә башҡалар ни өсөн хатта үҙ машинаһы ултырған урынды ла көрәгеһе килмәй - ябай ғына ялҡаулыҡ. Кемдеңдер һинең өсөн килеп эшләп биреүен көтөү.

Икенсе яҡтан, идара итеүсе компаниялар ҙа йәһәт кенә эшләй һалмай бит, йә таҙартып өлгөрмәй, йә үҙҙәренең ҡарамағында булған территорияларҙы "онота". Ғәйепләне эҙләй башлаһаң, эт - эткә, эт - ҡойроҡҡа, һөҙөмтәлә бөтөн бәләләрҙә ҡала хакимиәте башлығы ғәйепле булып сыға. Бындай күренеш хәҙер ауыл ерендә лә күҙәтелә. Мәҫәлән, беҙҙең тыуған ауылда балалар баҡсаһы бар. Ул утын яғып йылытыла, бының өсөн махсус штат тотола. Үҙҙәренең урам һепереүсеһе бар. Бына ошо штаттарҙы йәйгелеккә эштән ебәрәләр ҙә, ҡыш етһә, ҡабат алалар. Йәй утын әҙерләмәгән ойошма ҡыш утын ярырға кеше, ихатаны таҙартырға урам һепереүсе эҙләп, кемгә инәлергә белмәй йөрөй. Ошо күренеш йыл да ҡабатлана. Был - үҙенә күрә бер алдашыу миҫалы. Ябай халыҡ уның схемаларын белмәй, барыһына ла ниндәйҙер кимәлдәге түрәне ғәйепләй ҙә ҡуя.

Быйыл Өфө ҡала хакимиәте территорияның кемгә ҡарағанын асыҡ күрһәтеүсе интерактив карта эшләнә. Уның һәм ундағы телефондар буйынса шылтыратып, шунда уҡ ҡайҙа ҡар таҙартылмағанын әйтергә була, тиҙәр. Әгәр был ысул ысынлап та эшләп китһә, халыҡ яғынан да ниндәйҙер контроль булһа, бәлки, хәлдәр яйланыр. Әммә машина хужалары үҙ транспорты эргәһен таҙартмай йәки ихата таҙартылғандан һуң машинаһы эргәһендәге ҡарҙы юлға ташлап, башҡалар өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙыра икән, бында, әлбиттә, беренсе сәбәп - ялҡаулыҡ, икенсеһе - оятһыҙлыҡ, кеше һанламау, башҡаларҙың хеҙмәтен һанға һуҡмау һәм күрше-күләнендә ихтирам итмәү тип кенә аңлатырға мөмкиндер.

**Жәмил СӘҒИТОВ.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!



# ЭШ ЭҘЛӘП - СИТКӘМЕ?

**Кешеләрҙе ҡоллоҡтан азат итеү менән шөғөлләнгән "Альтернатива" хәрәкәте әүҙемселәре Башҡортостандан алыҫ юлға йөрөүсе шоферға өйөнә ҡайтырға ярҙам итте. Ул Дағстанда хеҙмәт ҡоллоғонда булған.**

54 йәшлек Радик Казин тәүҙә Мәскәүгә эшкә килә. Һөнәре буйынса эш тапмағас, күпмелер ваҡыт Мәскәү өлкәһе Малаховка ҡасабаһындағы тәҙәләштә иретеп йәбештереүсе булып эшләй. Аҡса түләмәгәнлектән, Радик эштән китә һәм аҡсаһыҙ, паспортһыҙ урамда тороп ҡала. Киев вокзалында билдәһеҙ ир менән таныша һәм ул уға Каспийск ҡалаһында айына 45 мең һумға иретеп йәбештереүсе эшен, йәшәргә урын һәм өс тапҡыр туҡланыу тәҡдим итә. Шул рәүешле яҡташыбыҙ Дағстанға хеҙмәт ҡоллоғона барып эләгә. Ҡот осҡос шарттарҙа йәшәй, көнөнә бер тапҡыр ғына ашай, эш хаҡын түләү тураһында һүҙ ҙә булмай, тип хәбәр итә ойошманың ирекмәндәре. Иң мөһиме, ул ҡасып китә алмай - ҡулдарҙы биклəп тотҡандар. Әйткәндәй, бер көндө Радик ҡоллоҡтан ҡаса һәм шул саҡта ирекмәндәр уға Дағстандан Мәскәүгә ҡайтырға ярҙам итә. Башҡортостанға тиклем билетка аҡса эшләү маҡсаты менән ир йәнә эшкә урынлаша һәм яҙмыш ҡушыуы буйынса Каспийскиҙағы ошо уҡ заводҡа барып эләгә.

Бер көндө Илья исемле берәү Радикты һатып ала һәм үҙенә теплица төҙөргә алып ҡайта. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ир хужаһынан өйөнә ҡайтырға рөхсәт һорай, тегеһе ҡаршы килмәй. Уның менән бергә Ильяла алты йыл буйына тир түккән тағы бер кеше ҡайтырға сыға. Хужа, аҡсаһыҙ һәм документтарһыҙ был ирҙәр бер ҡайҙа ла китә алмаҫ, тип уйлағандыр, бәлки. Ләкин ҡасҡындар Махачкалаға барып етә. Бында Радик полицияға мөрәжәғәт итә, тәртип һаҡсылары иһә Радикты "Альтернатива" хәрәкәтенең Дағстан буйынса координаторы Закир Исмаиловҡа тапшыра. Волонтерҙар ирҙе Башҡортостанға оҙатыу өсөн документтарын тергеҙеүҙә ярҙам күрһәтә. Ул гәзәти тормошҡа ҡайтырға, йәнә алыҫ юлда йөрөргә һәм ҡот осҡос ҡоллоҡто оноторға теләй.

Әйткәндәй, "Альтернатива" хәрәкәтенә - алты йыл, ошо ваҡыт эсендә 500-гә яҡын кеше ҡоллоҡтан азат ителгән. Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә, ҡайһы берҙә сит илдә лә ҡотҡарыу операциялары уҙғарыла. Беҙҙең сит ерҙәргә, илдең төрлө тарафтарына эш эҙләп сығырға йыйынған ирҙәргә уйланырға урын бар бында. Ҡарағыҙ әле, ошондай михнәттәргә тарыуға ҡарағанда, эш-шөғөлдө үҙ тыуған ереңдә табыу яҡшыраҡ түгелме?

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Етен кеҫәле

❖ Ҡул, аяҡтарҙың бармаҡтары йыш ойой икән, был ҡан тамырҙары менән бәйле булыуы ихтимал. Кис 1/3 стакан етен орлоғона 1 литр һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә һәм 2 сәғәт ҡайнар һыуны һыуыта торорға. Төнө буйы төнәтәбеҙ һәм иртән һөҙәбеҙ. Яҡынса 850 мл кеҫәл кеүек масса барлыҡҡа килә. Уны 5 көн эсергә: иртән ас ҡарынға һәм кис ашағандан һуң 1/3 стакан. Дауаны 15 көн ҡабатлағыҙ. 3 ай ял иткәндән һуң, тағы 15 көн етен киҫәле эсегеҙ.

## Радикулит

❖ Был рецепт гәҙәти радикулит, миозит, бәрелгән урындарҙы, ҡабырғаара невралгияһынан шифалы. Тигеҙ өлөштә йод менән глицеринды ҡушып болғатырға һәм мамыҡ менән арҡаға һөртөргә. Умыртҡа бағанаһына тейергә ярамай. Кизе-мамыҡ кейем кейеп, йоҡларға ятырға. Ҡалын итеп ябынырға тырышмағыҙ. Көн аша ошолай 15 процедура яһарға кәрәк. Кемдең йодҡа аллергияһы бар, уларға был дауаны эшләргә ярамай.

## Меланома

❖ Меланома - тире яман шешенең башланып ҡына торған стадияһында тигеҙ күләмдә ҡайын бөрөһө, дегәнәк тамыры, монар көпшәһе (болиголов), клевер, сөйәл үләне алып, 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнау хәленә еткерергә, 1 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙергә һәм етен туҡыманы ошо төнәтмәгә манып, ауыртҡан урынға ҡуйырға. Кипһә, яңынан алыштырырға.

## Тынысланыу өсөн..

❖ Күңел тыныслығын ҡайтарыу өсөн үләндәр эсеп алыу ҙа файҙалы. 50-шәр грамм бәйгәмбәр тырнағы сәскәһе менән мәтрүшкә, 30 грамм еҙтөймә (пижма) үләнен бергә ҡушып болғатығыҙ. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2-3 ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр (ашар алдынан) яртышар стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Башҡорт мәктәбендә уҡып, башҡорт мәктәбен тамамлауыма бер ваҡытта ла үкенмәнем һәм үҙемдең балаларымды ла ошо мәктәпкә уҡырға бирҙем. Сөнки башҡорт рухлы, башҡорт мәҙәниәтле булыуы өсөн балаға мөхит кәрәк.*

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Яңы һуғышҡа әҙерләнеү

Был хәл тураһында ишетеп ҡалған мосолмандар, ҡоралланып, ҡойнаҡ ырыуы кешеләренә ташлана. Ҡойнаҡтар, ҡасып барып, үҙ ырыуының төп ҡәлғәһенә бикләнә. Уларҙа ете йөҙләгән ир була, ләкин яу һөнәрен үҙҙәренә ҡарағанда күпкә һәйбәт үҙләштергән һәм дәррәү күтәрелгән мосолмандарға тейешле ҡаршылыҡ күрһәтә алмаясағын аңлайҙар. Шуға ла оазистағы йәһүҙи динен тотоусы башҡа ырыуҙарға, шулай уҡ монафиҡтарға ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр. Ләкин тегеләре, мосолмандарҙың берҙәмлегенән ҡурҡып, ярҙамға килмәй. Тик монафиҡтарҙың етәксеһе - Абдаллаһ ибн Ғөбәй генә, хәрби ярҙам күрһәтмәһә лә, Мөхәммәт бәйғәмбәргә килеп, мосолмандарҙы тынысландырыуҙы талап итә. "Юғиһә, ете йөҙ яугир башында үҙем һиңә ҡаршы сығам!" - тип ҡурҡытып та маташа. Тик Мөхәммәт бәйғәмбәр уны йортонан ҡыуып сығара. Монафиҡтарҙың көсө байтаҡ булһа ла, Абдаллаһ ибн Ғөбәй уларҙы мосолмандарға ҡаршы алып сығырға баҙнат итмәй, сөнки уның яугирҙары, монафиҡ булһалар ҙа, үҙҙәрен мосолманға һанай, Ҡөрьән уҡый, көнөнә биш тапҡыр намаҙ ҡыла.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡойнаҡтарға ҡаты шарт ҡуя: йә мосолмандар һөжүмгә күсеп, уларҙы тулыһынса ҡыра, йә Ислам тәғлимәтен ҡабул итәләр, йә инде ҡоралдарын һалып, оазистан сығып китергә тейештәр. Ҡойнаҡтар шарттарҙың һуңғыһына күнеп, сығып китергә булалар һәм Мәҙинәнән өс йөҙ саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Хәйбәр оазисына юлланалар. Уларҙың ата-бабалары Мәҙинәгә ҡасандыр ошо оазистан күсеп килгән була, бында уларҙың ырыуҙаштары көн күрә.

Ҡойнаҡ ырыуы кешеләренең оазисты ҡалдырып китеүе мосолмандарҙы тағы көсәйтә. Сөнки, беренсенән, уларҙың Мәҙинәләге дошмандары ете йөҙ яугирға кәмей, икенсенән, бушаған йорттары һәм ерҙәре ансар ғаиләләрендә йәшәүсе мөһәжирҙәргә бирелә.

## Өхөд һуғышы

625 йылдың 11 мартында ҡөрәйш мәжүсиҙәре ғәскәре мосолмандарға ҡаршы Мәҙинәгә юллана. Улар менән Әбү Суфиян етәкселек итә. Ҡөрәйштәргә ярҙамға башҡа ырыу яугирҙары ла килә, уларға Мәккә янында йәшәүсе эфиоптар ҙа ҡушыла. Был ғәскәрҙә өс мең кеше була. Улар менән бергә иллегә яҡын ҡатын-ҡыҙ ҙа - Бәҙәр һуғышында һәләк булған яугирҙарҙың ҡатындары - сыға. Ҡатын-ҡыҙҙар һуғышыр өсөн түгел, ирҙәрҙе һуғышҡа дәртләндереү өсөн бара. Бынан тыш, Ҡәғбәләге илаһтарҙың иң абруйлыларын һәм һуғышта ярҙам итерлектәрен дә ҡөрәйштәр үҙҙәре менән алып сыға. Илаһтарҙы махсус дөйәләргә ултыртып алып баралар.

Ун көндән ҡөрәйш мәжүсиҙәренең ғәскәре оазисҡа килеп етә һәм баҡсалар араһында ял итергә туҡтай. Мосолмандар иһә уларҙың төнгө һөжүмен көтөп, төнө буйы Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең йортон һаҡлай. Иртәнсәк хәрби кәңәшмә ҡорола. Күптәр ҡала эсенән сыҡмайынса һуғышырға тәҡдим итә.

Тик шулай ҙа ҡөрәйштәр менән асыҡ урында һуғышырға, тигән фекер өҫтөнлөк ала. Ете йөҙ мосолман яугиры ҡаланан сығып, һуғышҡа әҙерләнә. Мәжүсиҙәр һәм йәһүҙиҙәр был ғәскәрҙә бик аҙ була - уларҙың күбеһе Абдаллаһ ибн Ғөбәйҙең монафиҡтары менән ҡаланы һаҡлап тороп ҡала.

23 март мосолман ғәскәре Өхөд тауы янына килеп етә. Ғәскәр менән Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе етәкселек итә. Тимер кейемде ул ике ҡатлап кейә. Ҡиммәтле һәм иҫ киткес ныҡлы ҡылысын Ҡөҙмән исемле даһи яугирға тоттора. Ҡөҙмән мәжүси була, ләкин был яуҙа үҙ оазисын һаҡлап, Мөхәммәт бәйғәмбәр менән бергә сыға.

**(Дауамы бар).**

ӨФӨ БАШҠОРТО

# ОФОҒОБОҘҘО КИҢӘЙТЕҮ КӘРӘК



**(Башы 5-се биттә).**

**➔ Һеҙ уҡыған ваҡытта Өфөлә бөгөнгө кеүек башҡорт мәктәптәре күп булмаған. Шулай ҙа ниндәй белем усағында уҡыуығыҙ менән ғорурланаһығыҙ?**

- Бәхеткә күрә, атай-әсәйем мине ҡалала ул ваҡытта берҙән-бер башҡорт урта белем усағы булып торған 20-се мәктәпкә уҡырға бирҙе. Башҡорт мәктәбендә уҡып, башҡорт мәктәбен тамамлауыма бер ваҡытта ла үкенмәнем һәм үҙемдең балаларымды ла ошо мәктәпкә уҡырға бирҙем. Сөнки башҡорт рухлы, башҡорт мәҙәниәтле булыуы өсөн балаға мөхит кәрәк. Бөгөн Фатима Мостафина исемен йөрөткән 20-се ҡала башҡорт гимназияһы был мөхитте бирә лә инде. Хәҙер хатта беҙ уҡыған йылдарҙан да артығыраҡ һеңдерәлер әле башҡортлоҡто. Һеҙ ошо мәктәптә уҡыған балалар ғына түгел, хатта уларҙың ата-әсәләренең вацап аша нисек аралашҡанын белһәгеҙ! Үҙе бер киң даирә! Ата-әсәләр ыңғайына балалар ҙа белем алып ҡына түгел, үҙ-ара һәм ғаиләләр менән аралашып үҫә.

**➔ Башҡортостан Республикаһы - уға исем биргән халыҡтың тыуған ере, берҙән-бер аҫаба төйәге. Уның баш ҡалаһы ла берәү генә һәм унда ла милли рух, милли үҙенсәлек күҙгә салынып торһон өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Башҡорттар урыҫтарға, хатта татарҙарға ҡарағанда урбанизацияға һуңыраҡ бирелгән халыҡ. Беҙҙең өсөн был процестар башланып ҡына тора һәм, һис шикһеҙ, емештәре лә күренә. Элек бошҡортлоҡтоң бишеге һәм таянысы ауыл булһа, хәҙер улай түгел. Милли мәҙәниәттең, сәйәсәттең, иҡтисадтың, хатта телде һаҡлап ҡалыуҙың үҙәге ҡалаларҙа, бигерәк тә - баш ҡалала. Өфөлә әлеге ваҡытта Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, "Юлдаш" радиоһы, Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте, милли баҫмалар редакциялары, мәктәптәр, юғары уҡыу йорттарындағы милли төркөмдәр, Фәндәр академияһы, Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре академик ансамбле булмаһа, беҙ ни эшләр инек! Хатта бөтөн донъяла филиалдарын булдырған "Икеа", "Ашан" кеүек ҙур магазиндарҙа мәғлүмәттәр, алтаҡталар башҡорт телендә яҙылған. Башҡортлоҡ бөтөнләй аңҡып тормай тип әйтеп булмай. Шулай ҙа был тенденцияны нығытыу буйынса эшләйһеләр күп әле, йәғни бөгөн яҡшы икән, һәр ваҡыт шулай булыр тип ышанырға ярамай, ә ошо яуланған үрҙәрҙе артабан да нығытыу, арттырыу йүнәлешендә эшләү мөһим.

**➔ Һеҙҙе социаль селтәрҙәрҙә "театрал тәнҡитсе" тип тә атайҙар. Быға һәр мәҙәни сараны, театр сәхнәләрендә ҡуйылған тамашаларҙы ҡалдырмай ҡарап барыуығыҙ һәм уларға ҡарата үҙ фекерегеҙҙе белдереүегеҙ сәбәпселер, моғайын. Ә мәҙәниәт әһелдәре был сығыштарығыҙҙы нисек ҡабул итә?**

- Театр артистары, етәкселеге, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән даими аралашып торам. Аллаға шөкөр, улар мине аңлап ҡабул итә һәм әле ошо нигеҙҙә бер кем менән дә асыуланышҡаным юҡ. Киреһенсә, уларға үҙҙәре тәҡдим иткән продукция хаҡында тамашасының фекерен белеү, яңы фекер ишетеү ҡыҙыҡ, шуға күрә тамашаларына һәр саҡ саҡырып торалар, хатта ҡайһыларына барырға ваҡыт та табып булмай. Бында бигерәк тә йәштәрҙе билдәләп китер инем, сөнки улар тамашасы фекерен тәнҡит тип түгел, ә үҫеш өсөн сираттағы баҫҡыс тип ҡабул итә һәм тамашасы фекеренә ҡолаҡ һалып, уның ихтыяжынан сығып эш итә. Әйтеп үтеүемсә, яҙыусылар ғаиләһендә тыуғанғамы икән, йәштән үк әҫәрҙәрҙе (яҙма булһынмы ул, фильммы, спектаклме) энәһенән-ебенәсә һүтеп, фекер алышырға яраттым һәм әле лә шул юлымды дауам итәм.

**➔ Бөгөн ҡала башҡорт мәҙәниәте ниндәй кимәлдә?**

- Ҡала башҡорт мәҙәниәте төшөнсәһе аҫтында нимә күҙ уңында тотола? Ғөмүмән, башҡорт мәҙәниәтенең баш ҡалала үҫешеме, әллә мәҙәниәттең нәҡ ҡала башҡорттарына хас булған үҙенсәлектәреме? Икенсеһе булһа, беҙгә был йүнәлеште үҫтерергә лә үҫтерергә әле. Әйе, үҙаллылыҡ йылдарында баш ҡалала "Каруанһарай", "Аманат" кеүек төркөмдәр барлыҡҡа килеп, яңы проекттар ("Урал моңо", "Йәшлек-шоу", "Һылыуҡай") булдырылып, улар милләттең мәҙәниәтен генә түгел, рухын үҫтереүҙә лә ҙур роль уйнаны, баш ҡала ғына түгел, республика мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнде. Ләкин, ошо ҡаҙаныштарға ҡарамаҫтан, беҙ әле юлдың башында ғына. Мәҫәлән, быуаттар буйына үҫешеп килгән грузин ҡала мәҙәниәтенең үҙ һыҙаттары бар. Был йырҙарында, тостарында, әҙәбиәтендә (шул иҫәптән, ауыҙ-тел әҙәбиәте өлгөләрендә) сағыла. Әммә беҙҙә лә был йүнәлеш бөгөн дискотека музыкаһында, рэп һөйләү кимәлендә генә туҡталып ҡалмаҫ тигән ышаныс бар.

**➔ Өфө башҡорттарында милли үҙаң үҫтереүҙә интернет-ресурстарҙың әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?**

- Интернеттың, бигерәк тә социаль селтәрҙәрҙең әһәмиәте тормоштоң барлыҡ өлкәләрендә лә бик ҙур. Шул иҫәптән милли үҙаңды һаҡлап ҡалыуҙа һәм үҫтереүҙә уның роле баһалап бөткөһөҙ. Йәштәр төркөмдәргә ойоша, араларға ҡарап тормай, туған телдәрендә үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған, көндәлек тормошонда яткан темаларға аралаша, милли музыка, видео өлгөләре менән алмаша, бер-береһен таба. Был яҡшы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!*

**Рәсәй империяһын дер һелкеткән, Романовтар династияһын юҡҡа сығарған, ғөмүмән, илебеҙҙе яңы үҫеш юлына борған ваҡиға - 1917 йылғы революцияға 100 йыл тулды. Бөгөнгө көндә был ваҡиғаға Рәсәй йәмғәтселегендә төрлөсә ҡараштар йәшәп килә. Ҡайһы берәүҙәр, революция сит илдәрҙең булышлығында махсус рәүештә, илде тарҡатыу өсөн эшләнгән сәйәси акт, тип иҫәпләй. Быға дәлил итеп Лениндың немецтәр менән бәйләнешен килтерә. Әммә был инҡилаптың объектив сәбәптәре етерлек була. Тәү сиратта, социаль масьәләләрҙең хәл ителмәүе, сәйәси азатлыктың булмауы, милли һәм ер мәсьәләләренең хәл ителмәүе бөтәһе бергә илде ошондай тетрәнеүҙәргә килтерә лә инде. Әйткәндәй, ошондай тезисты быйыл Алмата ҡалаһында ойошторолған "түңәрәк ҡор"ҙа Мәскәү ғалимы, тарих фәндәре докторы А.В. Ганин дә әйтеп үтте.**

# ҺӘЙКӘЛГӘ ЛАЙЫҠ ШӘХЕСТӘР:

## Усман Ҡыуатов



*Усман Ҡыуатов ғаиләһе менән. Алғы рәттә әсәһе һәм атаһы (Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов). Артта, һулдан уңға: Усман һәм Ғүмәр - Ҡаҙан университетының медицина факультеты студенттары. Һеңлеһе Шәкирә - Ҡаҙан гимназияһы уҡыусыһы. Ҡаҙан ҡалаһы, 1914 йыл.*

Тарих шуны күрһәтә: әгәр ҙә власть эволюцион үҙгәрештәргә әҙер түгел икән, илде революцион үҙгәрештәр көтә. 1917 йылғы революция илгә тетрәнеүҙәр килтерһә лә, икенсе яҡтан, быуаттар буйына йыйылып яткан проблемаларҙың береһе - милли мәсьәләне хәл итеүгә юл асты. Тап 1917 йылдың үҙгәреш тулҡынында Башҡортостан милли дәүләтселеген булдырыу хәрәкәте тыуҙы. Был хәрәкәттә башҡорт халҡының төрлө ҡатлам вәкилдәре ихлас ҡатнаша. Авангардта милли интеллегенция, дин әһелдәре һәм дворяндар тора. Шуға күрә лә совет йылдарында милли хәрәкәткә "буржуаз милли хәрәкәт" тигән ярлыҡ таҡтылар. Ә ысынында иһә, 1917 йылда батша власы ҡолатылғас, бөтөн башҡорт халҡы - ярлыһынан алып байына тиклем мөстәҡиллек идеяһы менән тоҡанды. Башҡорт халҡы берҙәм булып, ошо идеяға фиҙакәр хеҙмәт итте, йәғни милли мөхтәриәт яулау көрәшенә сыҡты. Милләттең алдынғы ҡарашлы, белемле, уҡымышлы, дәрәжәле вәкилдәре - дворяндар ҙа был хәрәкәттең етәкселегендә булды. Мәҫәлән, башҡорт дворяндары Мутиндар, Ҡыуатовтар, Солтановтар, Ҡарамышевтар, Өмөтбаевтар, Аҡсулпановтар һ.б. нәҫеләнән булған вәкилдәр милли хәрәкәттең башында торҙолар.

XIX быуаттан билдәле данлы Ҡыуатовтар нәҫеләнән булған мөстәҡиллек өсөн көрәшкән аталы-уллы Мөхәмәтғәлим, Ғүмәр һәм Усман Ҡыуатовтарҙың эшмәкәрлеге тураһында бигүк белеп етмәйбеҙ. Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов мәғрифәтсе булып танылһа, Ғүмәр Ҡыуатовты беҙ Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау системаһына нигеҙ һалыусы, тип белһәк, Усман Ҡыуатов әле иғтибарҙан ситтә ҡала килә. Әммә тап Усман Ҡыуатов 1917 йылда 1-се Башҡорт ҡоролтайынан һуң Зәки Вәлиди һәм Илдархан Мутин менән Санкт-Петербургҡа барып, Ваҡытлы хөкүмәт ҡаршыһында башҡорт хоҡуҡтарын даулап йөрөгән шәхестәрҙең береһе. Быйыл арҙаҡлы шәхестең тыуыуына 120 йыл тулды.

Усман Мөхәмәтғәлим улы Ҡыуатов 1897 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең Ҡыуат-Бикбирҙе ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районына ҡараған Үтәғол ауылы) тыуған. Үрҙә телгә алып үткәнемсә, ул данлыҡлы башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар нәҫеленән. Билдәле булыуынса, Ҡыуатовтар кантон идаралығы осоронда (1798-1865) кантон башлыҡтары ярҙамсылары булып хеҙмәт иткән. Аралауынан иң күренеклеһе Әлмөхәмәт Ҡыуатов 1848 йылда Ҡаҙан университеты философия факультетының Көнсығыш телдәр бүлеген тамамлап, киләһе йылына филология (словесность) буйынса кандидатлыҡ дәрәжәһен ала.

Усман Ҡыуатовтың атаһы Мөхәмәтғәлим Әбделғәни улы (1873-1937) үҙ заманының уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы кешеләренең береһе, мәғрифәтсе була. Ырымбур гимназияһында белем ала. Донъяуи фәндәр уҡытыуға ҡоролған тиҫтәнән ашыу башҡорт мәктәбен асыуға өлгәшә. 1891-1894 йылдарҙа үҙе асҡан Сермән ауылы мәктәбендә директор булып эшләй. В. В. Катаринскийға "Букварь для башкир" (1892) китабын әҙерләүҙә ҙур ярҙам күрһәтә. Улдары Ғүмәр менән Усманды юғары белемле итеү өсөн тырыша. Тәүҙә өлкән улы Ҡаҙан университетының медицина факультетына уҡырға инә, уның артынса Усман шул уҡ факультетҡа бара. Әммә университеттың 4-се курсында уҡыған-да илдә ҙур үҙгәрештәр башлана. Рәсәйҙә батша власы ҡолатылып, демократия һәм азатлыҡ һулышы бөтә ил халҡын ҡуҙғата. Усман Ҡыуатов башҡөллө Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшенә сума.

1917 йылдың июнь аҙағында Усман Ҡыуатов Ырымбурҙа үткән Башҡорт өлкә бюроһының йыйылышында ойошторолған милли хәрәкәткә етәкселек итеү органы - "Башҡорт халҡының иттифаҡи бюроһы" составына ҡабул ителә. 1917 йылдың 20-27 июлендә Ырымбурҙа үткән 1-се Башҡорт ҡоролтайында У. Ҡыуатов Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетына һайлана. Ҡоролтайҙан һуң ул Әхмәтзәки Вәлиди, Илдархан Мутин менән берлектә Петроградҡа юллана. "Мине, Усман Ҡыуатов исемле университет студентын һәм Илдархан Мутин тигән бер зыялыны башҡорттарҙың ер хоҡуғын һәм батша заманынан йыйылып килгән башҡорт капиталын, Ырымбурҙағы Башҡорт ғәскәре биналарын, парк һәм баҡсаларын, мәсетен (Каруанһарай) кире алыу мәсьәләләре буйынса Керенский хөкүмәте менән осрашыу, быуындан-быуынға ҡалып килгән был дәғүәләрҙе хәл итеү өсөн Петроградҡа ебәрҙеләр... Усман Ҡыуатов, йәш кенә медик- студент булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт ер хоҡуғы мәсьәләләрен аңлай ине. Беҙ хөкүмәткә тапшыра торған документта 1906 йылдың 9 ноябрендә, 1910 йылдың 19 ноябрендә, 1911 йылдың 20 майында сығарылған һәм Башҡортостанға урыҫ күскенселәре килеүҙе көсәйткән закондарҙы үҙгәртеү талабы ҡуйылды", - тип яҙа хәтирәләрендә Вәлиди. Башҡорт вәкилдәре Петроградта ер мәсьәләләрендә уңышҡа өлгәшә алмаһа ла, Каруанһарайҙы башҡорт халҡына ҡайтарыу эшен һыңай хәл итеп ҡайта.

1917 йылдың октябрендә Башҡорт үҙәк шураһы Усман Ҡыуатовты Ырымбур губернаһы башҡорттары исеменән Ойоштороу йыйылышына (Учредительное Собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтә.

1918 йылдың ғинуарында Усман Ҡыуатов башҡорт делегацияһы составында Ҡаҙанда үтәсәк мосолмандарҙың 2-се Хәрби съезына юллана. Әйткәндәй, ошо осорҙа Усмандың атаһы Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов Үҫәргән кантонының съезында күпселек тауыш менән кантон башҡармаһы рәйесе итеп һайлана.

**Азат ЯРМУЛЛИН,
тарихсы,
БР Дәүләт китап палатаһы директоры.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Башҡорттар тарихына бер нисә концепция

Башҡортостан, Татарстан һәм Рәсәй ғалимдары араһында башҡорт халҡының тарихын башҡа халыҡтар менән бәйләп өйрәнеүселәр бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡорттарҙы башҡа халыҡтарҙан сыҡҡан тип нигеҙһеҙ рәүештә яҙа, был хәл башҡорт халҡының дөйөм мәҙәниәтен тарҡатыуға алып килә. Бындай нигеҙһеҙ раҫлауҙар С.Ғәләмовтың, Р.Вахитовтың, М.Зәкиевтың һ.б. хеҙмәттәрендә күҙәтелә. Мәҫәлән, башҡорт халҡының тарихы буйынса документтарҙа һәм материалдарҙа (боронғо дәүерҙәрҙән XVI быуаттың уртаһына тиклем, авторҙар Ф.Ғ. Хисаметдинова, А.В. Псәнчин, В.В. Овсянников) көньяҡ Урал халыҡтары хаҡында һүҙ барғанда "һинд-иран проблемаһы" менән осрашабыҙ. Күрһәнең, башҡорттарҙың тарихына ҡарата бындай мөнәсәбәткә был халыҡтың үткәнендәге тарихи процестарҙың тәрән һәм күп яҡлы булыуы этәрәләр. Башҡорт ҡәбиләләре яҙмыштарының үҙ-ара сейәләүе уларҙың араһындағы сикте билдәләүҙә ауырлыҡ тыуҙыралыр, күрһәнең. Бында доктор Никольскийҙың фекерен килтереү урынлы булыр, унда ысынбарлыҡ асыҡ сағыла: "...Минә күп тапҡырҙар зыялы башҡорт ирҙәрен һәм башҡорт ҡатынҡыҙҙарын урыҫ ҡулдағенда күрергә тура килде: бындай саҡтарҙа уларҙың башҡорт милләтенән булыуҙарын айырыуы еңел түгел ине. Уларҙы күҙ-ҡолаҡтарына ҡарап ҡына башҡорт икәнлеген танып була, башҡа билдәләре буйынса башҡортто урыҫ ҡәбиләненең ҡатнаш тибынан айырыу еңел түгел. Башҡорттарҙың күбеһе урта буйлы, һын-һыпаттары әллә ни мыҡты булып тойолмаһа ла, самаһыҙ көслөләр һәм ҙур ауырлыҡтарҙы һәм еңел булмаған шарттарҙы күтәрергә һәләтле. Сәйәхәтем барышында мин уларҙың тәбиғәт һәм иҡтисад афәттәренә ҡаршы ниндәй кимәлдә сыныҡыу тәрбиәһе алыуҙарына бер нисә тапҡыр шаһит булып инандым. Йөҙ төҙөлөшө буйынса башҡорттар төрки телле халыҡтарҙан айырылмай тиерлек. Уларҙы Ҡаҙан, Әстрхан татарҙары, венгрҙар менән йәнәш ҡуйһаң, бер төрлө баш һәм йөҙ төҙөлөшө буйынса башҡорттарҙы айырырмын тимә. Шулай уҡ түңәрәк, ярайһы ҙур баш, һоро йә ҡуңыр, күбеһендә яҫы һәм ҡыҫыҡ күҙҙәр, тура һәм ҙур булмаған маңлай, ҡарпыш ҙур ҡолаҡтар, һирәк, ҙур булмаған һаҡал. Башҡорттар йөҙгә йәмһеҙ түгел, уларҙың араһында матур йөҙлөләр күп. Башҡорттарҙың матурлығына ҡарата дөйөм ҡараштың ниндәй сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килгәнен белмәйем. Күптәр уларҙы (күрһәнең, үҙҙәрен күрмәйенсә генә, күҙ алдына килтереп) монгол тибындағы йыртҡыс йөҙлө, ҡылый күҙле итеп һүрәткә төшөрә. Бәлки, быға уларҙың башҡорт-мишәр ғәскәрҙәре сафында милли кейемдәге һынланышы буталышҡа алып килгәндер. Бәлки, күптәр уларҙы ҡырғыҙҙарҙан айырмайҙыр, бәлки, тағы ла бындай һүрәттәрҙе төшөрөүселәр бала саҡтарынан монгол урҙаларын иҫендә ҡалдырып, башҡорттарҙы шулар өлгөһөндә күҙ алдына килтергәндер. Дөрөҫ, кейем кешене ныҡ үҙгәртә. Зуав кейгән француз шундуҡ икенсе милләт кешеһе булып һынлана. Тап шуның кеүек үҙенең милли кейемендәге һәм дала атында үҙенсәлекле ултырышындағы башҡорт тәү ҡарашҡа ҡырғыҙ булып ҡабул ителергә лә мөмкин. Уны бер нисек тә ултырыҡ тормош менән йәшәүсе дала татары итеп күреп булмай. Шул уҡ ваҡытта башҡортто Европа йәки урыҫ кейемендә көнкүрештә күҙ алдына килтерегеҙ: тәьҫорат бөтөнләй башҡаса буласаҡ..."

**(Дауамы бар).**

✓ ***Кемдер берәү һиңә насарлыҡ ҡылып та, уны ғәфү итһәң, һинең ниндәйҙер башҡа гонаһтарыңды Аллаһы Тәғәлә ғәфү итер, тигән Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм.***

# БУЛҺАҠ...

## менән бүләкләр



рып ебәрер ине. Әлбиттә, әсәй ҡатындарҙы ғына сәйгә йыйып ала. Күршеләр ҙә ҡалмай. Ошо сәй табынына йыйылған ҡатындарға әсәй оло хөрмәтен күрһәтә. Һәр ваҡыт бикле, шуға күрә беҙгә һәр ваҡыт серле булған һандығын аса һәм унан һинд сәйен ҡулына ала. Әле уйлап ҡуям. Ауылда халыҡ бер-береһенә иғтибарын йәлләмәгән, килеп тыуған ҡытыршылыҡтарҙы мәлендә күрә һалып, уға үҫеп китергә мөмкинлек бирмәгән. Бына ошондай тәмле сәйгә, яҡты йөҙгә, йылы һүҙгә ҡоролған сәй табынында килеп тыуған тормош картәләре үҙенән-үҙе юҡҡа сығыуы көн кеүек асыҡ бит инде. Хатта апай-инәйҙәр аралағы бәхәстәр тураһында һүҙ ҙә ҡуҙғатып тормағандыр әле. Эйе, ауыл ағинәйҙәре үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүҙе бик уйлап һәм аҡыллы хәл иткән. Сәйгә хөрмәт итеп саҡырыу - үҙе генә лә "һәр эт күңеленә бынамын тигән бер елле һөйәк". Етмәһә, ағинәйҙәр ғәйеплеләрҙе әрләп түгел, ә сама менән маҡтап, сама менән шелтәләп, үҙ баштарынан үткәндәрен миҫал итеп һөйләп тәрбиәләгән бит.

**Х. Һөйөндөков:** Эйе, был әйтем дә туранан-тура кешеләр араһындағы мөнәсәбәткә ҡағыла. "Кешеләргә бер йылы һүҙ етә..." тип тә йырлайҙар. Йылы һүҙ тигәндәй, уның ни тиклем мөһим булыуына ябай ғына бер миҫал: кемдер һиңә низер хаҡында һорау бирҙе, ә һин яуабын белмәйһең икән, ти. "Ғәфү ит, был һорауға яуап бирергә ҡыйынһынам", йәиһә "Әлләсе, белмәйемсе..." тип кенә әйтеү, минеңсә - дөрөҫ. Ә инде "Мин уны ҡайҙан беләйем?", "Ҡайҙан алып бирәйем мин һиңә?" тигән һымағыраҡ яуаптар тиктомалдан кешенең күңелен ҡырыуы мөмкин. Бына шулай, бер үк мәғәнәле һүҙҙе төрлөсә итеп әйтергә мөмкин. Мин үҙем бала сағымдан уҡ шуның һымаҡ "арҡысторҡос" һөйләшеүҙәрҙе ифрат та ауыр кисерәм. Сирек быуат әрме шарттарында ла йәшәгән булыуыма ҡарамаҫтан, күп тапҡырҙар килеп бәрелгән кирбескә өйрәнә алмаған баш һымаҡ, үҙ-ара тупаҫ мөғәмәләләргә тәки күнегә алманым. Һәр кем дә башҡаларҙың үҙенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәтен теләйҙер. Һөйләшкәндә бүтәндәрҙең күңелен, уй-кисерештәрен дә һәр саҡ күҙ уңында тотоу кәрәк. Яғымлы итеп һөйләшеүсе кешегә ҡарата шунда уҡ ихтирам тойғоһо уяныусан була бит.

**Т. Баһаутдинова:** Мин үҙем өс минуттан артыҡ турһая алмайым шикелле ул. Йәшерәк саҡта ирем менән әҙерәк һүҙгә килешеп алһаҡ та, мин 3-5 минуттан онота ла ҡуя торғайным. Тегегә һүҙ ҡушһам, был өндәшмәһә, нимәгә улайтып ултыра һуң әле ул, тип уйлайым да, "Әй-й, һуң беҙ үсегешкәйнек бит әле", тип, уны ла "реанимациялау" яғын ҡарай инем. Ә туғандарға килгәндә, ике туған ҡустым: "Апай, һин бит ул беҙҙе берләштереп тороусы", - ти. Шунан да ҙур баһа юҡтыр ул.

**"Эт менән эт булма", тигәне лә бар аҡылдың. Ҡайһы саҡта тормош юлында шундай "эттәр" осрай, нисек ҡотолорға белмәҫһең. Быныһының да беҙҙең халыҡтың принципиаллегенә төбәп, тыйып әйтелгәне раҫтыр илла. Сөнки беҙгә йыш ҡына башлағанды ташлап ҡуймау, аҙағына еткереү һәм, иң мөһиме, бәхәс-низағты еңеү менән тамамлау теләге хас. Теләк - бер, ә бына берәйһенең этлегенә баттыңмы - унан бысранмай, имен килеп сығыуы, ай-һай, күпме нервы, йоҡоһоҙ төн һәм хәүеф-хәтәргә торошло. Ошо хаҡта һеҙҙең фекер?**

**Ә. Шәрипов:** Бик дөрөҫ һүҙҙәр былар. Беҙгә атай мәрхүм ошолай әйтә торғайны: "Тел менән түгел, ә эш менән еңегеҙ, ә телегеҙҙе уйлап ҡына ҡулланығыҙ". Был аҡыллы һүҙҙәр мине күп бәләнән ҡотҡарғандыр әле. Әле атайымдың был һүҙҙәрен мин үҙемдең балаларыма гел әйтә киләм. Әйткәндәй, мин үҙем биш балаға атай. Эш мәлендә төрлө хәлдәр була бит инде. Бына әле етәксе берәүҙе әрләп ташланы. Йәнәһе лә, ул эшләмәй, эшләһә лә, насар эшләй һәм фәлән дә фәсмәтән. Ә теге егеттең һәйбәт эшләгәнен, һис юғында, башҡаларҙан бер ҙә генә кәм эшләмәгәнен барыһы ла белеп тора. Ә бына мин "Уның урынында булһам, мин нимә эшләр инем икән?" тип фәһем алып торам. Ә теге егет аҡыллы. Эт менән эт тә булмай, шул уҡ ваҡытта үҙ бәҫен дә төшөрмәй. Ҡыҫҡаһы, етәксе әрләй, ә хеҙмәткәр өндәшмәй. Ҡаршы өндәшмәгән кешене оҙаҡ әрләп булмай икән, тигән һығымтаға килеп ҡуям мин. Етәксене әйтәм, аптырағас, теге егетте нисегерек кәмһетергә белмәй, ошолайыраҡ әйтеп ҡуйҙы: "Минең алда һайлау мөмкинлеге булһа, мин һине түгел, ә фәләнде һинең урынға ҡуйыр инем". Теге егет тыныс ҡына яуап бирә: "Ысынлап та, ул бик шәп егет бит, минең һайлау мөмкинлеге булһа, хатта мин уны һеҙҙең урынға директор итеп ҡуйыр инем". Бындай яуапты көтмәгән етәксе: "Нисек упёртый булдың, шулай упёртый булып ҡалдың", - тип кенә әйтә алды. Теге егет, аптырап киткән кеше булып, башын тырнап алды: "Ә мин ул һүҙҙе белмәйем, әллә маҡтанығыҙ инде", - ти. Эт менән эт булырға кәрәкмәй, мәле менән башты алйотҡа һалыу өсөн дә аҡыллы баш кәрәк, тип уйлап ҡуйҙым мин шул саҡ.

**Х. Һөйөндөков:** "Эт менән эт булма", тип тә халыҡ юҡҡа әйтмәгән. Бында ла әлеге "бахыр" эттең һис кенә лә ҡыҫылышы юҡ. Ә насар кеше менән низағлашмауҙың хәйерлерәк булыуы хаҡындалыр был әйтем. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, бында ниндәйҙер берәй артыҡ мөһим булмаған мәсьәлә буйынса кем менәндер бәхәс ҡуйыртыуҙың килешеп етмәгән яғы күҙ уңында тотола. Ундай миҫалдар тормошта етерлек. Һәр кем үҙенең дөрөҫлөгөн иҫбатларға тырышып, хатта оло ғауға сығыу осраҡтары ла булғылай. Мәктәп йылдарында бер малай менән бәхәсләшеп киттек. Ай менән Ер хаҡында. Ерҙең тәбиғи юлдашы булараҡ, Ай дүрт мәртәбәгә Ерҙән бәләкәйерәк булыуы хаҡында китаптан уҡыған инем. Был турала синыфташыма әйткәс, уға оҡшаманы. Ул, киреһенсә, Ай Ерҙән ҙурыраҡ, тигән уйҙа булған икән. Үҙемдең хаҡлығымды иҫбатлай торғас, шул "пүстәк" кенә нәмә өсөн тегенең менән һуғышып киттек. Хәҙер уйлайым: бәлки, миңә бәхәсләшергә кәрәк тә булмағандыр... Кемдер берәү һиңә насарлыҡ ҡылып та, уны ғәфү итһәң, һинең ниндәйҙер башҡа гонаһтарыңды Алла Тәғәлә ғәфү итер, тигән Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, һис юҡҡа башҡалар менән үсләшеп йөрөү мосолман кешегә хас булырға тейеш түгел. Шул уҡ ваҡытта, әгәр берәүҙең яман кеше икәнен белеп тә, уның менән дуҫлашып китеү ҙә "эт менән эт булыу"ға оҡшаш...

**Т. Баһаутдинова:** "Эттәр" менән эт булмаҫҡа тормош үҙе өйрәтте. Йәнә "Тиҙәк менән булышһаң, эҙе ҡалмаһа ла еҫе ҡала" тиҙәр бит. Йәшерәк саҡта, эйе, еңге килеп кенә тора. Хәҙер "Алйот, еңдем, тиер, аҡыллы, ҡуйҙым, тиер" тигәне яҡыныраҡ. Эт этлеген итте, берҙе тешләп китте, тигән һымаҡ, эттәр ғүмере буйы эт булып ҡала инде ул. Юҡ-юҡта ла үҙҙәрен һиҙҙереп, абалап ҡалғылайҙар. Ләкин эт менән эт булмау принцибына инанғанмын. Йәнә Хоҙайға яҡынлау тормошҡа ҡарашты ныҡ үҙгәртә. Ҡиммәттәр үҙгәрә. Шул күҙлектән ҡарағанда, "эттәр" сүп кенә бит ул.

**"Эт этлеген иткән - үҙ башына еткән" - бындай хәлдәрҙе лә күреп-белеп торабыҙ йыш ҡына. Ғүмер буйы кеше менән булып, яманлашып, көнләшеп, ғәйбәт сәйнәп йәшәгән әҙәм ҡасан да булһа үҙ яҙаһын ала (әлегә алмағандары ла күп, әлбиттә). Ошоноң менән килешәһегеҙме?**

**Ә. Шәрипов:** Минеңсә, бындай кешеләрҙе йәлләргә генә ҡала. Улар бит сит кешенән бигерәк, үҙҙәрен эстән бөтөрә. Халыҡ та ихтирам итмәй уларҙы. Быны мин сит ил кешеләре менән аралашҡанда айырыуса аңланым. Бер мәл Бөрйәнгә немецтар килгәйне. Тәржемәсе мине алдан уҡ аңғартып ҡуйҙы: "Был немецтар бергә килһә лә, үҙ-ара артыҡ аралашмай-ҡатышмай. Быға аптырамағыҙ. Бында ғына түгел, хатта үҙ илдәрендә лә артыҡ ҡатышып бармайҙар. Хатта күршеһе күршеһенә бик һирәк инә. Ҡатышырҙар ине, сәбәп юҡ. Етеш, мул тормошта йәшәйҙәр. Аҡса бар, өй бар, өй эсендә бөтә нәмә бар. Шуға, нимә тип күршеңә инеп бараһың да, нимә тип туғаныңа китеп бараһың?" Тәржемәсе миңә ошоларҙы һөйләй, ә мин ипләп кенә эскәмйәлә ултырған дүрт немец ғаиләһенә күҙ һалам. Тәү ҡарамаҡҡа, ҡәҙимге кешеләр. Бары тик ҡараштары ғына моңһоу. Шул мәл урман араһынан тырылдап "Восход" матайында берәү килеп сыҡты. Килеп туҡтау менән үк, һаумы - һау, хәлдәр нисек - хәл бер көйө, тигәнерәк йәнле һөйләшеү башланып китте. Шул арала геүләп яныбыҙға "Жигули" килеп туҡтаны. Унан өсәү килеп сыҡты. Бишәү булып киттек хәҙер. "Ҡайҙа китеп барыу? - Балыҡҡа. - Селәү алдығыҙмы? - Һинән алырбыҙ тигәйнек. - Миндә бөттө шул, бер Баймаҡҡа ҡайтҡанда тағы алып килеп ебәрмәйенсә булмаҫ инде. - Теге һуңғы алып килгәнең бигерәк шәп үрсегәйне. - Улары таҙа тоҡомло ине бит. - Шулай шул, нисәмә йыл үтте, ә һаман "Б" тигән тамғалылары һирәкләп осрап тора. - Селәү булмағас, нимә эшләйбеҙ инде хәҙер? - Әлегә сиңерткәгә тотоп ҡарағыҙ. - Тотам тиһәң, ул һикерә лә инде..." Бына ошолай буш хәбәр һөйләп, шуға риза булып көлөшәбеҙ шунда. Ә аҙаҡ немецтар әйтеп ҡуйҙы: "Нисек бәхетле икәнегеҙҙе һеҙ үҙегеҙ генә белмәйһегеҙ". Уларҙың ошо һүҙҙәренән һуң тормошҡа ҡарашым күпкә үҙгәрҙе, буғай. Минең уйымса, ғүмер буйы кеше менән булышып, яманлашып, көнләшеп, ғәйбәт һөйләп йәшәгән әҙәм был тормошта уҡ үҙ яҙаһын ала башлай. Башҡалар менән ысын күңелдән һөйләшеп тороуҙан, кеше менән ихлас аралашыуҙан, ябай ғына һөйләшеүҙән дә шатлыҡ таба алмауҙан мәхрүм бит ундай кешеләр.

**Х. Һөйөндөков:** "Эт этлеген иткән - үҙ башына еткән", тигәндәй, башҡаларға һәр саҡ яуызлыҡ ҡылып, кешеләр хаҡында һәр төрлө ғәйбәт һөйләп, ғөмүмән, тирә-йүндәгеләргә зыян эшләп йөрөүселәр, әлбиттә, Аллаһы Тәғәләнең иғтибарынан ситтә ҡалмай. Кешенең ғәмәл дәфтәрендә уның һәр бер ҡылығы яҙылып бара, яҡшыһы ла, насары ла. Ҡылған яҡшы ғәмәлдәре өсөн әжер-сауаптар, ә насар эштәре өсөн бәндәләренә был донъяла йә ахирәттә яҙа биреү, йәиһә, ысын күңелдән тәүбә иткәндәрҙе ярлыҡау - тик бер Раббыбыҙ ҡөҙрәтендә. Әҙәм балаһы, әлбиттә, "этлек" ҡылған берәй яуыздың фәҡәт ошо донъяла яҙа алыуын күреп ҡәнәғәтләнгеһе килә. "Нисек шундай әҙәмдәрҙе Ер күтәрә?.. Нишләп был "эттәр" менән һис бер ни ҙә булмай?" тип һөйләнгеләй бәғзеләр. Ә уның яҙаһын ғәҙел Аллаһ, бәлки, ахирәткә ҡалдыралыр... Шулай ҙа, яманлашҡан кешенең яҙаһы был донъяла ла ҡайтарылыу миҫалдарын әллә күпме килтерергә, дөрөҫөрәге, шул хаҡта уйланып, фаразларға булалыр. Оҙайлы хәрби хеҙмәтемде тамамлап бөтөп барғанда, ниндәйҙер бик ашығыс документ алырға тип, штабта ултырған бер кешегә мөрәжәғәт итергә тура килде. Теге кеше "хәҙер минең ҡабул итеү сәғәтем түгел" тигән һылтау менән минең үтенесемде кире ҡаҡты. Әммә минең дә бирешергә иҫәбем юҡ ине. "Мине, табип булараҡ, төн уртаһында йә ял көнө булһа ла, госпиталгә саҡыртып алып китәләр. Ошо көнгәсә бер кемгә лә ярҙам итергә баш тартҡаным юҡ. Һеҙ, исмаһам, минең табиплығымды булһа ла иҫәпкә алығыҙ, зинһар..." - тинем. Ә теге иптәштең яуабы ҡыҫҡа булды: "Ә мин табип түгел!" Тик бер-нисә көндән ул кинәт кенә сирләп, миңә приемға килде. Бында мине осратырмын, тип уйламағайны, буғай, йөҙөнә уңайһыҙланыу билдәһе сыҡҡанын тойомланым. Бер ҡасан да табипҡа бармаясаҡмын, тигән һымағыраҡ инаныуҙағы булған был кешегә, әлбиттә, бер ни ҙә өндәшмәнем, пациентымды иғтибар менән ҡарап, анализдар тапшырырға һәм рентгенға ебәрҙем. Тик ул миңә ҡабат әйләнеп килмәне. Оялғандыр, тип фаразланым. Был уның әлеге "этлеге" менән бәйлеметүгелме икәнлеген, әлбиттә, беҙ раҫлай алмайбыҙ, Аллаһу Әғләм, йәғни, тик бер Аллаһы Тәғәлә Үҙе генә белә.

**Т. Баһаутдинова:** Килешәм. Үҙебеҙҙе уратып алған тормошта бәғзе берәүҙәрҙең "этлеген итеп, үҙ башына еткән" миҫалдар етерлек. Их, кеше ошоларҙы өйрәлтөп уйлап, киләсәгенә фәһем алһын ине лә бит. Бер нәмә лә осраҡлы түгел инде ул. Яҡшылыҡ сәсеп кенә изгелек урып була икәнен онотмаһын ине әҙәм балаһы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**һорауҙар бирҙе.**



Лена ХӘЙРУЛЛИНА

# БАЛАҠАЙҒЫНАМ

(Хикәйә)

–Киленегеҙҙе барып алығыҙ! Күпер төбөндә ята. Иҫерек!

Түрҙәге һикелә, мендәргә янтая биреп аяғында бала тирбәткән Сәбилә был һүҙҙәрҙән һиҫкәнеп китте. Мендәре-ние менән йәһәт кенә сабыйҙы һыпырып төшөрөп, ишеккә ыңғайланы. Хәбәр еткергән кем булды һуң? Хәйер, кем булһа ла ул кешенең йөҙөнә күтәрелеп ҡарай алмаҫ ине. Ояты ни тора!

- Ҡәһәрең! Ҡәһәрең! - ҡатын һөйләнә-һуҡрана бәрелеп-һуғылды ла, тыҡрыҡҡа ҡараған тәҙрәһенә ҡапланды. - Ә-ә-ә... күршеһе Заһир икән... Ана, алпан-толпан баҫып, үҙҙәренә ыңғайлай. Шул йөрөр юҡ-бар күреп!

- Йә, Раббым! Һуң, ниндәй гонаһым өсөн?... - Ул, төпкө яҡты ҡарашы менән байҡап, көйһөҙләнеп ятҡан балаға екерҙе:

- Ныу бәхетһеҙ икәнеңде белеп шарылдайһыңдыр! Был саҡлы ла илаҡ булмаҫ инең! Наҙайыл! - Үҙе ашыға-ашыға ишек яңағындағы элгестән фуфайкаһын һәрмәп эләктерҙе лә, шәрә балтырҙарын халат итәге менән ҡаплаштырып, тышҡа атылды. - Ғәфүр, балам, теге күпер төбөндә ята, ти бит. Кеше күреп бөткөләгәнсе барып ала һал! - Шул ыңғайы етеҙ генә утынлыҡта һөйәүле торған ағас сананы һөйрәп төшөрҙө. - Мына, ошоға һалып апҡайт! Йәһәтерәк ҡылан, балам!

Улы өндәшмәне. Уртын сәйнәп, тешнәкләнде лә, ситкә ҡарап, сырт итеп төкөрөп ҡуйҙы. Түш кеҫәһенән тәмәкеһен сығарып ҡапҡайны ғына, урамдан үтеп барыусы арт яҡ күршеһе әсе телен бәреп уҙҙы:

- Күрше, теге нәмәң ауыл осонда ята бит. Барып ал. Туңып ҡуймаһын. Бисәһеҙ ҡала күрмә! Иһи-һи-һи...

Ихаталағы тауыштарҙы ишетеп, мал ҡарап йөрөгән еренән Хәмзә ҡарт килеп сыҡты. Нимәләр иҫенә төшкәндәй, ҡулын һелтәне лә, кире инеп китте. Йәнә сыҡты. Ағас санаға сөйҙә элеүле торған септәне ырғытып, урынынан ҡуҙғалырға торған Ғәфүргә өндәште:

- Мә, мылтыҡ! Ат шул нәмәңде! Ат, тим! Күҙемә күрһәтәһе булма! Йә үҙем икегеҙҙе бер юлы атам! Йөҙөмдән көлдөгөҙ! Кешенән оят! - Мылтығын тотоп, улы яғына ыңғайлаған ҡартты бисәһенең сәрелдәп сәбәләнеүе лә туҡтата алманы. Ҡан көҫәгән хайуандай, күҙе томаланып, ул улының муйынына барып йәбеште:

- Ат тим шуны! Ат! Ҡотолайыҡ!

Шул саҡ донъя бер минутҡа туҡтап ҡалғандай булды. Бығаса тыныс тормош менән йәшәп ятҡан ябай ғына ауыл өҫтөндә бының ише лә яман һүҙҙәр ишетеп, инде алтмышты аша атлаған атай кешенең үҙ улына кеше ғүмерен ҡыйырлыҡ ҡорал тотторғанын күреп, ана ҡылынам, бына ҡылынам тип торған ер йөҙөндәге иң әшәке нәмә - енәйәттең шаһиты булырға тура килһә, Тәңре, үҙендә был саҡлы ла оло гонаһты кисерерлек көс тапмайынса, ошо ихатаны ғына түгел, ә тотош ауылды үҙ ризалығынан яҙҙырып, был тәбәкте мәңгелеккә ташлап китер ине, моғайын.

- Ни һөйләйһең, атай? Бала бар бит! - Ғәфүрҙең һүҙҙәре, әйтерһең дә, барыһын да үҙ урынына ҡуйҙы. Ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы. Күптән нуры ҡасҡан донъяларына саҡ ҡына булһа ла ҡот өҫтәргә теләгәндәй, сәңгелдәктә тулап ятҡан малай - кескәй Баязиттың барлығы, әйтерһең дә, әле генә аңына барып еткәндәй, олатай кеше тынып ҡалды. Сәбилә йортҡа ташланды. Был ваҡытта Ғәфүр, артынан пар сана юлы һыҙып, ҡапҡанан сығып юғалғайны инде.

Ярымшәрә көйөнсә ҡар өҫтөндә аунап ятҡан ҡатынын ауыл осондағы күпер төбөнән барып тапты ул. Ир уның туҙған сәстәрен арлы-бирле йыйыштырып, яулығы аҫтына тыҡты ла, һөйрәп алып санаһына һалды. Өҫтөнә алып килгән септәне япты. Урамда осрағандар, яурындарын һәлендереп, алға табан эйеленкерәй биреп атлаған ирҙең һөйрәгән йөгөн дә, уның ҡайҙан килеүен дә самалай ине, шуға күрә өндәшмәй, баш ҡағып, иҫәнләшеп кенә уҙыштылар. Аңланылар. Йәлләнеләр.

Ҡасандыр ошо урамдарҙың йоҡоһон алып, төндәрен гармун тартып йөрөүсе ауылдың иң дәртле егете бөгөн меҫкен ҡиәфәттә эскесе ҡатынын һөйрәп ҡайтып бара. Юҡ, эскесе ҡатынын ғына түгел, үҙ яҙмышын һөйрәп бара ул. Әсе, мәғәнәһеҙ һәм бәхетһеҙ яҙмышын...

Һыуыҡҡа бирешеп, санала йолҡош көсөктәй бөршәйеп ятҡан ҡатынды Ғәфүр сананан йолҡоп алып, түрҙәге карауатҡа индереп һалды ла, йылыға ингәс, тағы ла ҡырҡыуыраҡ булып сыҡҡан еҫкә укшый-укшый, сисендерергә тотондо. Салбарын һыпырып төшөргәс, бот төбөндәге күм-ҡара таптарҙы күреп, уртын сәйнәне: "Тағы мәсхәрәләгәндәр!" Ҡаҡашып ҡатҡан эске күлдәктең төймәләрен ысҡындырып та тормайынса, йән асыуынан икегә айырып йыртҡас, һөт төшөүҙән саманан тыш тирткән имсәкте һөйрәп сығарып, ашарға көтөп тулап ятҡан сабыйының ауыҙына тыҡты. Уныһы сәсәй-сәсәй имергә тотондо.

- Араҡы ғына имеп үҫә инде шул бала! - Һеңгәҙәп карауат ситендә ултырған ирҙе алғы яҡтан сыҡҡан тауыш һиҫкәндерҙе. - Әйтәм дә, шешәләп һыйыр һөтө генә имеҙәйек, тип. Ҡаршылашаһың бит, - Сәбилә ҡулын алъяпҡысына һөртә-һөртә алғы яҡтан төпкө өйгә сыҡты. - Ярамай, имеш. Юҡты.

- Ярамай шул, әсәй. Һыйыр һөтө ашҡаҙанын боҙа. Кәзәнеке булһа - бер хәл. Барыбер әсә һөтөнә етмәй ул. Ныҡышма!

- Ана һөтө, ана һөтө... - ҡартәсәй кеше, һөйләнә-һөйләнә, ейәнен карауаттан бишеккә күсерҙе. - Үлмәй ҙә бит, исмаһам! - Был һүҙен рәнйеп, айырым бер ҡәһәр ҡушып әйтте, әйткәненән үҙе лә һиҫкәнде.

- Ни һөйләйһең ул, әсәй? Бала...

- Баланы әйтмәйем дә... Анауҙы!..

Ғәфүр ырғып тороп, әсәһенең алдына уҡ килеп баҫты:

- Ниткән һүҙең был, әсәй? Бала бар бит!..

Башҡаса Сәбилә йортонда бының ише һөйләшеүҙәр ҙә, ҡарғыш-рәнйештәр ҙә булманы. Аҙна-ун көн самаһы ваҡыттан һуң ҡайҙалыр сығып китеп олаҡҡан эскесе ҡатындың мәйете ауыл зыяратына урынлаштырылды. Әле етемлектең ни икәнен аңларлыҡ аҡылы булмаһа ла, үҙ башына төшкән өлөштөң әселеген тойғандай, шалҡан ише аҡ малай, алған-һалғанды белмәй, көндө төнгә ялғап иланы ла иланы. Иланы ла иланы...

* * *

Гөлзаданың фатирында төн ҡарай ғына телефон шылтыраны. Уҡытыусы ҡатын, ваҡ-төйәген йыйып, дәрестәрен икенсе кешегә тапшырҙы ла, таң һарыһы менән вокзалға юлланды. Ғәфүр уны оло юлда көтә ине. Ауылғаса араны артыҡ һөйләшмәй генә уҙҙылар. Һәр кем үҙ уйҙарын тәртипкә килтереү менән мәшғүл булды. Битенә сәпәп яуған епшек ҡар менән айҡашып, бейек ауыл тупһаһына килеп баҫҡанда, Гөлзада, дарҫлап типкән йөрәген бер аҙ тынысландырып, үҙен ҡулға алғайны инде.

- Әйҙүк, балам! - Өйҙөң алғы яғынан килеп сығып, үҙен апаҡ беләктәре менән һығып ҡосаҡлаған Сәбиләнең артыҡ көйөнөүҙән, бошоноуҙан кесерәйеп ҡалған кәүҙәһе ҡатындың ҡосағында килеш сайҡалып ҡуйҙы. Ярҙам һорап ялбарған зур йәшкелт күҙҙәренән тамған йәштәре уның муйыны буйлап ағып төштө. - Шәп килдеңме?

Нуры ҡасҡан йорттоң алғы яғында, һәр ҡайһыһы үҙ уйҙарына бирелеп, ҡосаҡтарҙан айырыла алмай торған был икәүҙе төпкө өйҙән сыҡҡан бала тауышы һиҫкәндерҙе. Атылышып, шул яҡҡа ыҫтылар. Өй түрендә, өрләккә эленгән бишектә теремек кенә сабый ята. Аҫты еүештер, кәүҙәһен ташлап илай.

Өҫтөндәге бөлтәһен яурынынан һелкеп ташлап, Гөлзада бәпескә ҡапланды. Уның йомшаҡ битенә биттәрен терәне, алмаштилмәш кескәй ҡулдарынан үпте.

- Балаҡайғынам... - Еүеш йүргәктәре менән ҡуша урынынан тырнап алып, бәләкәсте күкрәгенә ҡыҫты.

Бәпес еҫе! Ошо еҫтән дә тәмлерәк ниндәй еҫ бар икән донъяла? Тормоштоң мең төрлө мәшәҡәтенән арындырыр, китек күңелдәрҙе имләр көсө булған ошо еҫтең үҙенә үтә лә танһыҡ икәнен аңланы ҡатын. Бала тотоуҙар, йүргәк алыштырыуҙар уның өсөн бөтөнләй ят шөғөл булып тойолһа ла, был күңелле мәшәҡәтте ярайһы ҙур оҫталыҡ менән башҡарып ҡуя алды.

Килтерелгән күстәнәстәрҙе теҙеп, табын хәстәрләгән Сәбилә бик һирәк ваҡыт ҡына үҙенә хас була торған иплелек менән Гөлзадаға өндәште:

- Беҙгә бөтөнләйгәләр бит, балам? Ризалашмаһаң, был баланы ҡалайтырым икән? Йәшем байтаҡ бит, аяҡҡа баҫтырып булмаҫ...

Төн сыҡҡансы етди ҡарарға килеп, ниндәйҙер ҙә яуаплы аҙымға барғанын был һүҙҙәрҙән һуң тағы ла нығыраҡ төшөндө уҡытыусы кеше. Үҙенең тәүәккәллегенә аптыраны. Ҡалағы бына тигән донъяһын ташлап, егерме йылға яҡын эшләгән мәктәбен ҡалдырып, ошо бала тип йәһәннәмдең үҙендә ятҡан ауылға сығып китте ләһә! Әсәһенең, ризалаш, балам, ете ят түгел, үҙ кешең бит, тигәненән һуң да бер аҙ икеләнгәйне әле, Ғәфүрҙең, ҡатыным үлде, улымды яныма алып ятһам, төнө буйы түшемә төртөлөп, имсәк эҙләй, тигән һүҙҙәре күңеленең аҫтын-өҫкә килтерҙе. Бына әле лә сабый, Гөлзаданың түшенә моронон терәп, мыш-мыш йоҡлап китте.

- Бөтөнләйгә тип килеүен килдем дә ул, - тине ҡатын икеләнеп кенә, - бала ҡараған кеше түгелмен бит әле... булдырып булырмы икән?

Өҫтәл артында теҙелешеп ултырған өсәү, остоҡ ҡына өмөттәре ҡыйралыуҙан ҡоттары осоп, уға тексәйгән дә, бары тик ыңғай яуап көтөүҙәрен йөҙҙәренә сығарып, тынып ҡалған. Шул һуңғы өмөттө селпәрәмә килтереүҙән ҡурҡып, нисәмә яҙмыштың үҙенә текәлеп ҡалыуын аңлаған, бынан бик күп йылдар элек йәшлегенең иң гүзәл мәлендә ошо Ғәфүр тип йән атып, ә юлдары аймылышҡас, уны юғалтыу ғазабынан арына алмай, һөйөү тигәндәренән тамам төңөлөп көн иткән уҡытыусы әҙәп кенә бер һүҙен әйтте:

- Булдырырмын!

Әллә ниндәй сихри көскә эйә булған был тылсымлы һүҙҙән өйҙәге көсөргәнеш шауҙырлап ҡойолоп төштө. Йөҙҙәргә ҡот ҡунды. Икенсе көндө таң һарыһынан түрҙәге урҙала ап-аҡ итеп йыуылған бала йүргәктәре елберләй ине. Тормош үҙ ағышын алды.

Бәләкәс байтаҡ үҫеп, Гөлзаданы танырлыҡ булды. Янына килеүе менән талпынып, әсәһенең ҡулына үрелде, үҙенә генә хас өндәр сығарып, телен асып маташты. Көйө килгәндә ҡыҫҡырып көлдө. Иң мөһиме - илауҙан туҡтаны.

Көн аша күрше ауылға кәзә һөтөнә йөрөнө ата менән әсә, уныһын шешәгә һалып имеҙеү менән тамағы туҡ сабый әсәһенең буш имсәгенә морон төртөп йоҡоға китер булды. Шундай саҡтарҙа, күкрәгенә һөт тирткәндәй булып, бөтә тәненә рәхәт бер йылылыҡ йүгерә ине ҡатындың. Әсәлек түле шулай ҡыҫтай тип уйлаһа ла, буйға уҙыу насип булманы. Үҙенең түлһеҙлеген аңлауҙан йәне ҡамсыланған саҡтарында, бәләкәс Баязитын йөрәгенә баҫа ла, алҡымына килеп тығылған төйөрҙө көс-хәл менән йотоп ебәрә:

- Балаҡайғынам...

Тора-бара үҙенең бала табыу бәхетенән мәхрүм икәнлеген тамам таныған ҡатын, Хоҙай тарафынан бирелгән әлеге бәхетен бик таман күреп, шөкөр ҡылды. Улыҡайына әйләнгән һайын тәүфиҡ, оҙон ғүмер теләне. Ел-ямғырҙан, тел-тештән ҡурсалап, иркәләп кенә үҫтерҙе. Матур торҙо улар Ғәфүре менән. Бер-береһенә ауыр һүҙ әйтеү түгел, ҡырын ҡараш та күрһәтмәнеләр. Донъя еткереп алдылар. Ҡайны-ҡәйнә лә, килен, тип өҙөлдө. Ана шул килен тигәндәре, иң юғары баһаға тиң булып, кеше араһында уҡытыусы тигән исеменән дә өҫтөнөрәк тойолоп, Гөлзаданың бәсен, мәртәбәһен күтәреп торҙо. Бигерәк тә ҡайныһы яҡын итте уны. Ҡороҡ холоҡло, яһиллығы өсөн ауылда "фашист Хәмзә" ҡушаматын йөрөткән ҡарт килененә ҡырыҫлыҡ күрһәтмәне. Ҡәйнә иһә, үҙ йортонда ошондай килен күреүенә Тәңрегә ризалыҡ белдереп, көнө-төнө рәхмәтен яуҙырҙы. Ваҡыты-ваҡыты менән йәшләй генә был донъянан китеп барған беренсе киленен иҫенә төшөрөп, һыҡталанып алды. Йәлләне. Иҫән сағында уға ҡарата үтә лә насар мөнәсәбәт күрһәтеүен, яҙмышына буйһоноп, сит тарафтан улына ҡатын булып килгән киленен үҙһенмәй, әйләнгән һайын битәрләп торған саҡтарын уйлап әсенде. Унан да бигерәк, үҙененең һуңғы арала йыш ысҡындырған "үлмәй ҙә бит, исмаһам" тигән һүҙҙәре Сәбиләнең йәнен ҡайыҙланы. Йә, Раббым, ник шулай ҡыландым мин, тип илауланы. Үкенде.

**(Дауамы бар).**

✓ *Шулай итеп, йәштәрҙең дуҫлығы Ҡыш бабайҙан башлана һәм өс балаға ғүмер биргән татыу ғаиләгә әүерелә. Зилә хәҙер ҙә ирен Ҡыш бабай тип йөрөтә икән. Ысынлап Ҡыш бабай булғас һуң!*



ШУЛАЙ ҘА БУЛА!

**Яңы йылды көткән мәлдәр, ысынлап та, ниндәйҙер бер мөғжизәгә ышанған, ымһынған ваҡыт бит ул. Бөтөн ерҙә шыршылар биҙәлеп, төҫлө уттар янып, урамдағы үтеп-сүтеп йөрөгән кешеләр йөҙөндә лә йылмайыу сағылып тора торған бер күңелле мәл. Мөғжизәләр көткән мәл. Һеҙгә бер танышымдың һөйләгәндәрен еткерәйем әле.**

# ЯҢЫ ЙЫЛ МӨҒЖИЗӘҺЕ



Был мөғжизә бынан 15 йыллап элек була. Зилә исемле ҡыҙ, ул саҡта әле кейәүҙә түгел, баш ҡала апайҙарында йәшәп, эшләп йөрөй. Апаһы менән еҙнәһе сменалап заводта тир түгә, ҡыҙ уларҙың ике бәләкәй балаһын ҡарашып, баҡсанан алып-ҡайтып, ярҙам итә. Яңы йыл байрамы яҡынлашҡас, башҡа бик күп балалар кеүек үк, Зиләнең апаһының ҡыҙы ла Ҡыш бабайға хат яҙа. Ҡыҙыҡайҙың теләгән тормошҡа ашырырға кәрәк бит инде, шуға ла атай-әсәй гәзиттәрҙәге иғландарҙы байҡап, Ҡыш бабай саҡырырға була. Ҡыш бабайҙар төркөмөнөң тығыҙ план графигына инеп ултыралар ултырыуын, тик ул ваҡыт тағы ла апаһының эштә булған сағына тура килә. Зиләгә был көн өйҙә булып, ҡунаҡтарҙы көтөргә ҡала.

Бына бер ваҡыт тулҡынланып көткән Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Аждаһа, тағы ла бер-ике әкиәт персонаждары килеп инә. Әҙерләнеп көтөп торған балалар шаҡ ҡата, бәләкәсе бөтөнләй ҡурҡып ҡасып китә. Балаларҙың береһе ятлаған шиғырын уҡып күрһәтә, бәләкәсен Ҡыш бабай менән бергә өгөтләп, йәшенгән бүлмәһенән көскә алып сығалар. Ҡыш бабай Зиләнең бүлмәһендәге карауат аҫтына боҫҡан малайҙы әүрәтеп, бер арауыҡ шул бүлмәлә ултырып сыға. Балалар бер аҙ өйрәнгәс, шыршы тирәләй йырлап-бейешеп, өйөрөлөп алалар, ҡунаҡтар уйын-көлкө ойоштора. Ҡыҫҡаһы, байрам матур ғына итеп ойошторолоп, бүләктәр тапшырыу менән тамамланып ҡуя. Барыһы ла ҡәнәғәт булып, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы оҙатып ҡуялар.

...Ошо хәлдән һуң бер нисә көн үткәс, Зилә эштән ҡайтып килгәнендә артынан кемдеңдер эйәргәнен аңғара. Боролоп ҡараһа - оҙон буйлы егет кеше. Егет уның аңғарғанын аңлап, ҡыуып етә. Һаулыҡ һораша. Әммә ҡыҙ ят әҙәм менән һөйләшергә теләмәй. Был егет әйтә икән: "Теләйһегеҙме, мин һеҙҙең исемегеҙҙе әйтәм?" "Юҡ", - тип ҡыҙ бара бирә. Егет һаман ныҡыша: "Һеҙ башҡорт ҡыҙы. Исемегеҙ "З" хәрефенә башланырға тейеш. Зөлфиә йәки Зәлиә..." Ҡыҙ аптырай төшә һәм "Ә ни өсөн тап "З"-ға?" тип ҡыҙыҡһына. "Сөнки һеҙҙең яҙмышығыҙ "З" хәрефе менән бәйле". "Әйт улай булғас исемемде", - тип туҡтап ҡала хәҙер ҡыҙ ҙа. "Бына ошолай һинең күҙемә ҡарауың кәрәк ине, - тип егет уға яҡынлаша, һәр аҙымы һайын бер исемде әйтә: - Зөлфирә... Зарема... Зилә. Эйе, Зилә булырға тейеш, тап ошо исем һеҙҙеке". Ҡыҙ көлә: "Һанай торғас, тура килтерҙегеҙме инде", - ти. "Юҡ, - ти егет, - мин күҙегеҙгә ҡарап, башҡа мәғлүмәттәрҙе лә әйтә алам. Мәҫәлән, һеҙ ана-а-ау тәҙрәлә йәшәйһегеҙ. Өйҙә ике бала көтә. Исемдәрен дә "ишетә" алам. Тә-әк... ҡыҙыҡай Әлиә... малай... Булат йәки ... исеме "Б" хәрефенә булырға тейеш". Зиләнең сәйерһенеп ҡарағанына ҡаршы, егет хәтеренә төшөргән кеүек итеп яй ғына теҙә бирә:

- Эргәндә бер йән эйәһе күрәм. Ә-ә... бесәй икән. Һарыбай тип өндәшәһең уға. Унан... яткан урының янында әсәйендәме, бер оло кешенең фотокарточкаһы тора...

Зилә хәҙер был егетҡә ауыҙын асып ҡарап ҡатып ҡала.

- Артабан һөйлә, - ти.

Егет йылмая ла: "Барыһын да һөйләй алам, киләсәгеңде лә. Тик, әйҙә, ҡабаттан осрашайыҡ. Мөмкин урамда йөрөргә йәки берәй кафеға инеп сәй эсергә", - ти.

- Улайһа, мин һеҙгә телефон бирәйем, - тиеүенә лә:

- Мин һеҙҙең телефонды "тегенән" дә ишетә алам, - тип, ҡулы менән генә һауаға иҙәп, егет китеп тә бара. Шаңҡыған ҡыҙ йүгереп ҡайтып, был хәбәрҙе апаһына һөйләй. Икәүләп бик ҡаты аптырашып, егеттең күрәҙәләсегенә иҫтәре китә.

Ял көнө шылтырата был күрәҙәсе. Ҡыҙ унын шылтыратыуын көтөп ала. Әллә күпме һорауҙар әҙерләп, йөрөргә сыға. Был юлы ла егет ҡыҙҙың йәшәгән урыны, өйҙәге нимәләрҙең ҡайҙа ултырыуы хаҡында, бигерәк тә балаларға байрам ойоштороуҙары хаҡында ентекләп һөйләй. Киләсәгендә иһә Айрат исемле кеше менән ғаилә ҡорасағы тураһында әйтә. Һөйләшеп йөрөп өшөгәс, егет Зиләне киноға саҡыра, йылылап ултырырбыҙ, ти. Былар кино ҡарап сыға, инде дуҫтарса аралашып китәләр. Хушлашҡанда ҡыҙ быныҥ исемен һорай. "Айрат", - ти был көлөп. Унан көлә-көлә серен асырға мәжбүр була. Баҡтиһәң, бер ниндәй ҙә күрәҙәсе түгел, ә ябай студент - буласаҡ табип икән ул. "Ә ҡайҙан беҙҙең өйҙәге хәлдәрҙе, ваҡ-төйәкте белдең?" - тип ныҡышлап хәҙер ҡыҙ. Айрат уны шаҡ ҡатыра: "Белдем инде, мин бит Ҡыш бабай..."

Шулай итеп, йәштәрҙең дуҫлығы Ҡыш бабайҙан башлана һәм өс балаға ғүмер биргән татыу ғаиләгә әүерелә. Зилә хәҙер ҙә ирен Ҡыш бабай тип йөрөтә икән. Ысынлап Ҡыш бабай булғас һуң!

**Миләүшә ХӘБИЛОВА тыңланы.**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

**Ошо көндәрҙә "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш гвардия" ойошмаһы БР Йәш яҡташтар берлектәре ассоциацияһы менән берлектә Өфөлә башҡорт телендә фекер алышыуҙар сараһы үткәрҙе. Мәктәп уҡыусылары һәм студенттар ҡатнашҡан был сара тураһында ойоштороусыларҙың береһе, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенты Байрас АЗАМАТОВ һөйләне.**

- Тәүҙә Сибай, Нефтекама, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй, Октябрьский, Учалы, Өфө, Салауат ҡалаларында башҡорт телендә фекер алышыуҙар буйынса һайлап алыу турҙары булды. Ярым финалға сыҡҡан ун ете команда Өфөлә ярышты. Һөҙөмтәлә, чемпиондар кубогын Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатының "Көслө тамыр" командаһы яуланы. Икенсе урынға М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Етегән" командаһы, өсөнсө урынға Нефтекама ҡалаһынан килгән "Йәш гвардия" командаһы сыҡты.

Әйтергә кәрәк, башта йәштәр "фекер алышыуҙар", йәғни, русса әйткәндә, "дебаты" тигән һүҙҙең мәғәнәһен аңлап бөтөрмәй ине. Быны улар бәхәсләшеү, бер-береңә негатив һүҙ ташлау, талашыу тип уйлаған. Ысынында, "дебаты" - ул үҙ фекереңде аңлатып әйтә һәм яҡлай белеү, фекер йөрөтөү, һүҙ оҫталығы һәм дипломатлыҡ талап иткән эш. Фекер алышыуҙар уйынының ике төрө бар: американ һәм британ форматы. Беҙ сарабыҙҙы британ форматында ойошторҙоҡ, беренсе турҙа ике кешенән торған дүрт команда уйнаны. Бирәүҙәр ҡуйылған проблемаға хөкүмәт ҡарашын еткерһә, икенселәр ҡапма-ҡаршы фекерҙе яҡларға тейеш булды. Һорауҙарҙы жюри ағзалары әҙерләне, уҡыусыларға күбеһенсә мәктәп, уҡыу процесыны, һөнәр, хеҙмәт, тәрбиә өлкәләренә ҡағылышлы темалар тәҡдим ителгән. Шулай уҡ интернет, телевидение, туризм, ауыл һәм ҡала менән бәйле бәхәсле мәсьәләләр ҙә күтәрелде. Әлбиттә, тәүҙә ҡатмарлы һорауҙарға яуап бирә алырҙармы, башҡортса фекер алыша һәм үҙ ҡараштарын яҡлай алырҙармы икән, тигән икеләнеү булды. Әммә ҡатнашыусылар сығыш яһай башлағас та был борсолоу юҡҡа сыҡты, сөнки улар сәмләнеп китеп үҙ фекерен иҫбат итеп кенә ҡалманы, телде яҡшы белеүҙәрен дә күрһәтте.

Шулай уҡ йәштәрҙең башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу, башҡортса фекерләргә, дөрөҫ һөйләргә өйрәтеү ҙә иң мөһим маҡсатыбыҙ булды. Уҡыусылар үҙ теләге менән уйынға әҙерләнә, башҡортса фекерен дөрөҫ белдереү өсөн терминдар һүҙлеген өйрәнә, кәрәкле әҙәбиәт менән таныша, республикаға бәйле һунғы яңылыҡтарҙы күҙәтеп бара, уйлана. Былар бөтәһе лә беҙҙең йәштәрҙе илдә барған хәл-ваҡиғаларға битараф ҡалмаҫҡа күнектерә, тип иҫәпләйем. Аҡыллы, илһөйәр, әүҙем граждандлыҡ позицияһы булған быуын тәрбиәләүгә бер өлөш индерә алды ойоштороусылар. Киләсәктә был проектты киңәйтеп, ҙурыраҡ форматта һәм өлкәндәр араһында ла үткәрергә мөмкинлек булыр, тип уйлайым

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

# ЙЫЛ СТУДЕНТЫ РАДМИЛА

**Рәсәйҙең "Йыл студенты-2017" милли премияһы һөҙөмтәләре буйынса, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенты Радмила Дәүләтшина "Йыл журналисы" номинацияһында лауреат исемен яуланы. Һәр лауреат аҡсалата премия менән бүләкләнде, тип хәбәр иттеләр юғары уҡыу йортонан.**

Премия фәнни, ижади, спорт, журналистика, йәштәр сәйәсәте, студенттар лидеры һәм йәмәғәт эшмәкәрлегендә айырым ҡаҙаныштарға эйә булған профессиональ мәғариф ойошмалары һәм юғары белем биреү ойошмаларында уҡыусыларҙың хеҙмәттәрен асыҡлау, ярҙам итеү һәм таныу өсөн тормошҡа ашырыла. Быйыл төбәк этаптары илдең 72 субъектында үтте, уларҙа 300-ҙән ашыу уҡыу йорттарынан биш меңдән ашыу студент ҡатнашты. Рәсәйҙең 62 төбәгенән 230 енеүсе - йәш ғалимдар, спортсылар, журналистар, студент берләшмәләре һәм ойошмалары вәкилдәре, мәғариф ойошмалары советы етәкселәре һәм лидерҙары финалға сыҡты. Конкурс һынауҙары программаһында үҙең менән таныштырыу, тоталь диктант, кейстар сисеү, интеллектуаль уйындар, шулай уҡ һәр номинация өсөн махсус эштәр ҡаралғайны. "Ҡырымдағы финал этабы ҡатмарлы ғына булды, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Башҡорт дәүләт университеты студенты Радмила Дәүләтшина. - Дүрт һынауҙы үттем. Мин һөҙөмтә менән ҡәнәғәтмен. Ҡайһы берҙә тап икенсе урын артабанғы ҡаҙаныштарға һәм еңеүҙәргә этәргес бирә".

# ЕҢЕҮСЕЛӘР ИҪӘБЕНДӘ

**Башҡорт дәүләт университетының икенсе курс магистранты Динара Кәримова 2017/2018 йылдарға Андрей Андреевич Вознесенский исемендәге шәхси стипендияға лайыҡ булды.**

Ул бөтә Рәсәйҙән туғыҙ студент иҫәбендә һайлап алыу турын уңышлы үтте, тип аңлаттылар юғары уҡыу йортоноң матбуғат хеҙмәтендә. Был стипендия журналистиканы һәм әҙәбиәтте өйрәнеүсе студенттарға бирелә. Һайлап алыу критерийҙары араһында: юғары уҡыу йортонда көндөҙгө бүлектә бюджетта уҡыу, юғары академик күрһәткестәр, баҫылған әҙәби, ғилми әҫәрҙәр, төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа һәм конкурстарҙа еңеүҙәр һәм призлы урындар.

Белешмә. Андрей Андреевич Вознесенский - шағир, прозаик, публицист. Уның исеме ваҡыт белмәй һәм мәңге һаҡлана торған әһәмиәткә эйә, тыуған ил мәҙәниәтенә һалған өлөшө шул хәтлем бөйөк, хатта ул донъя ҡуйғас та уның исеме менән шәхси стипендия бирелә. Уға юғары уҡыу йорттарынан йыл да туғыҙ студент дәғүә итә ала.

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮПМЕ УЙЫНСЫҠ КӘРӘК?

■ Һәр быуын унан алда йәшәгән быуынға ҡарағанда оҙонораҡ ғүмерле, сәләмәтерәк һәм кәүҙәгә лә ҙурыраҡ була. Шулай уҡ тормош сифаты ла тотороҡло рәүештә алға китә, медицина, гигиена үҫешә, туҡланыу яҡшыра һ.б. Әммә бындай үҫеш сикһеҙ дауам итә алмаясаҡ, тип белдерә француз ғалимдары. Һәр биологик төр кеүек, кеше үҫешенең дә сиктәре бар. Париж Декард университеты профессоры Жан-Франсуа Туссен XX быуат башынан йыйылған мәғлүмәттәрҙе тикшереүгә генетик, антропологтарҙы ла йәлеп иткән. Уртаса йәшәү оҙайлығы, уртаса буй һәм физик мөмкинлектәр иҫәпкә алынған. Генетик факторҙарҙы, тирә-яҡ мөхиттең йоғонтоһон да онотмағандар. Туҡланыу, медицина һәм фән өлкәһендәге прогресҡа ҡарамаҫтан, был күрһәткестәр һуңғы йылдарҙа бөтөнләй үҙгәрмәй икән. "Тимәк, хәҙерге йәмғиәт үҙенең үҫеш сиктәренә килеп еткән", - ти ғалимдар. Элек яңынан-яңы рекордтар ҡуйылып тора ине. Хәҙер бындай үҫештәр юҡ, тип белдерә улар. Мәҫәлән, рәсми рәүештә теркәлгән ғүмер оҙайлығы - 120 йәш, әле берәү ҙә был йәштән үтеп киткәне юҡ. Уртаса буй оҙонлоғо ла 1980 йылдарҙан бирле бер урында тора - ҡатын-ҡыҙҙар өсөн - 170, ир-егеттәр өсөн 180 см. Спорт өлкәһендәге рекордтарҙың яңырыу тиңлеге лә ҡырҡа кәмегән. Шул уҡ ваҡытта шундай күренеш тә бар - мөхиттең, климаттың үҙгәреүе һөҙөмтәһендә был күрһәткестәр, кireһенсә, кәмей. Мәҫәлән, һуңғы ун йыл эсендә Африка илдәрендә йәшәүселәрҙең буйы ҡыҫҡара бара.

■ Толедо университеты тикшеренеүселәре балаға уйынсыҡты күп итеп алыу хата, тип белдерә. Улар 36 баланы күҙәткән һәм ошондай һығымтаға килгән. Ата-әсәләр балаларҙы уйнау зонаһында ярты сәғәткә ҡалдырып киткән һәм ҡайһы берҙә уйынсыҡтар иҫәбе - 4, ҡайһы берҙә 16 булған. Уйынсыҡтар аҙыраҡ булған һайын, бала фантазияһын йышыраҡ ҡулланған. Бынан тыш, уйынсыҡтар аҙ булғанда, бала уларҙың һәр береһе менән уйнаған. Күп ваҡытын был уйынсыҡтар менән тағы ла ниндәй уйын уйнарға була икән, тип баш ватҡан. Был һығымталар баланың уйынсыҡтары күп булмаҫҡа тейеш тигәнде түгел, ә бер юлы балаға күп уйынсыҡ бирмәҫкә кәрәклекте раҫлай. Шулай уҡ малайҙарға ҡурсаҡ, ҡыҙҙарға машина менән уйнарға мөмкинлек бирергә кәрәк. Был гармониялы үҫеш өсөн мөһим.

■ Бала уң ҡолағы менән ишеткәнде яҡшыраҡ аңлай һәм хәтерендә ҡалдыра, был ғалимдар тарафынан күптән дәлилләнгән. Әммә өлкәнәйгәс тә был өҫтөнлөк һаҡланамы? Ғалимдар ошо һорауға яуап эҙләгән. Уң ҡолаҡ аша ингән тауыштар баш мейеһенең һул яҡ ярымшары тарафынан эшкәртелә. Ә был өлөш телмәр һәм хәтер менән бәйле. Һәр ҡолаҡ мәғлүмәттең айырым өлөштәрен ишетә һәм һуңынан улар ишетеү системаһында берләштерелә. Тик бәләкәй балаларҙың ишетеү системаһы ике ҡолаҡҡа ла бер юлы ишетелгән мәғлүмәтте айыра алмай. Шуға ла улар уң ҡолағы менән яҡшыраҡ ишетә. Һынауҙар күрһәтеүенсә, өлкәндәрҙә лә был һәләт һаҡлана, тик улар бының менән ҡулланыуҙы онота.

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН

# ЭТ ТӘ ҒАИЛӘ ТАТЫУЛЫҒЫН ЯҠЛАР



**Көнсығыш йондоҙлоғо буйынса 2018 йыл Һары эт йылы булып нарыҡлана. Бынан алдағы ике йылға Ут стихияһы идара иткәнлектән, планеталағы тормош глобаль үҙгәрештәргә дусар ителде, һәр төрлө шау-шыу, ығы-зығыларҙың да, сағыу ваҡиғаларҙың да шаһиттары булдыҡ. Яңы йылдың яңы хужаһы, ниһайәт, ерҙә тәртип урынлаштырыр, башбаштаҡлыҡтарға сик ҡуйыр, тип өмөт итә йыл фаразлаусылары. Йыл позитив һәм тыныс энергетикалы буласаҡ, ти улар. Ер стихияһы йән тыныслығы, интеллектуаль емештәре менән һөйөндөрөр. Эт ғаилә ҡиммәттәре яҡлы, был өлкәлә мөнәсәбәттәр нығыныр, ир менән ҡатын араһында үҙ-ара аңлашыу күпкә яҡшырыр. 2018 йылда ныҡышмал, эшсән, намыҫлы кешеләр уңышҡа өлгәшер, тип өмөт ителә. Тик тәүге айҙарҙа башлаған эштәрҙе тамамлап, күптәнге вәғәҙәләрҙе үтәп ҡуйыу шарт. Йондоҙнамә күпселек өсөн киләһе йыл әллә ниндәй бөйөк ҡаҙаныштар һәм уңыштар вәғәҙә итмәһә лә, яҙмышың өсөн артыҡ хафаланырға ла урын юҡ. Шулай итеп, ҡайһы йылда тыуыуына ҡарап, теге йәки был хайуан һәм йәнлектәрҙе кәүҙәләндереүсе билдәләр һары Эт йылында үҙҙәрен нисек тоясаҡ?**

***Эт** (1922, 1934, 1946, 1958, 1970, 1982, 1994)* билдәһен йөрөтөүселәр өсөн үҙ йылдары айырыуса уңышлы киләсәк, айырыуса финанс өлкәһендә һәм шәхси тормоштарында. Һәм, ғөмүмән, уларҙы йыл буйына уңыштар ғына һағалаясаҡ. Уларҙың ҡышҡы, яҙғы айҙары көслө хис-тойғо һәм романтик кисерештәргә бай буласаҡ. Йәй аҙағы иһә никах мәшәҡәттәре менән үтһә, ғаилә артыуы хаҡындағы хәбәр ҙә һөйөндөрөр бәғзеләрҙе. Көҙ йыл хужалары торлаҡ мәсьәләләре менән мәшғүл булыр, шул сәбәпле финанс ҡытлығы тыуыр, ләкин ниндәй генә осраҡта ла банк тирәһенә яҡын юламаҫҡа кәңәш ителә - туғандар ҙа, дуҫтар ҙа ихлас ярҙам ҡулын һуҙыр.

***Сусҡа** (1923, 1935, 1947, 1959, 1971, 1983, 1995)* йылы тыуғандар яңы йылдың тәүге айҙарында уҡ бик күп эш тәҡдимдәре алыр. Уларҙы бик иғтибар менән ентекләп ҡарап сығығыҙ: ҡайһыларының бигүк ышаныслы булмауы ла бар. Белеп эш иткәндә, апрель айҙарына матди хәлегеҙ бермә-бер яҡшырыр, тип көтөлә. Аҡсаны мотлаҡ эшкә ҡушыу кәрәк: үҙегеҙҙең бизнесты асып ебәрәһегеҙме, ҡуртымға тапшырыу өсөн күсемһеҙ милек һатып алаһығыҙмы - һеҙҙең эш. Йәй тыныс үтер, үҙгәрештәр һиҙелмәҫ, шулай ҙа оҙаҡҡа түгел: көҙ эш алыштырыу теләге тыуыр, ә ҡайһы берәүҙәр хатта яңы һөнәр үҙләштереүҙән дә ҡурҡмаҫ - ихтимал, бының өсөн хатта ҡайтанан уҡып алырға тура килһә лә. Ғаилә хәлдәре тыныс, элекке үпкәләр онотолор.

***Сысҡан** (1924, 1936, 1948, 1960, 1972, 1984, 1996)* йылы тыуғандарға бер аҙ уйланырға тура килер, сөнки эт сысҡанды яратмай. Ләкин бик хәүефләнеп тә китмәгеҙ әле: сысҡандар һәр саҡ юлын таба ул. Әлегесә, "уйланып алыу" тигәне - тактиканы дөрөҫ һайлау. Шул саҡта үҙ теләгегеҙгә мотлаҡ ирешерһегеҙ. Йыл башында шулай ҙа бик ныҡ әүҙемлек күрһәтмәй тороу хәйерле булыр: көс туплағыҙ, маҡсат билдәләгеҙ һәм уны бойомға ашырыу өсөн уңайлы мәл еткәнен һағалағыҙ. Йәй был сабырлығығыҙ өсөн һеҙгә уңыш йыл-

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# АСЫҠ ЙӨҘЛӨ,

## татлы телле бул



**Әхлаҡ, әҙәп һүҙҙәре бер мәғәнә бирә. Әҙәпле кеше тигәндән, беҙ тәртипле, күркәм сырайлы, бөхтә кейемле кешене күҙ алдына баҫтырабыҙ. Был төшөнсәләрҙе тәрәнерәк төшөнөр өсөн, минең уйлауымса, иң беренсе Ислам диненә мөрәжәғәт итергә кәрәктер.**

Ул - кешеләрҙең йәшәү рәүеше. Мосолман кешеһенең йәшәү рәүеше гүзәл, күркәм, әхлаҡлы булырға тейеш. Бына ошо әҙәп, әхлаҡ, тәрбиә мәсьәләләре динебеҙҙә һәр осраҡ аңлатылған. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. уларҙы беҙгә өйрәтеп, күрһәтеп ҡалдырған. Ул бик тә тәрбиәле, тәҡүә, мәрхәмәтле кеше булған. Хатта уның дошмандары ла Бәйғәмбәребеҙҙең яҡшы сифаттарын таныған. Ҡөрьәндә лә: "Дөрөҫлөктә һин, әй, Мөхәммәт, бөйөк, яҡшы холоҡлоһоңдор" ("Ҡәләм" сүрәһе, 4 - се аят") тип әйтелгән. Мөхәммәт бәйғәмбәр ошо яҡшы тәрбиәне беҙгә лә өйрәтеп ҡалдырған. Тимәк, беҙгә иң ҙур өлгө, иң яҡшы, иң күркәм үрнәк - ул бәғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. Шулай булғас, беҙгә уға эйәрергә, уның сөннәттәрен иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Әҙәп, әхләҡ ул кешегә тыумыштан да бирелә, тиҙәр. Әммә ул ғаиләләге тәрбиә, уҡыу, өйрәнеү аша күберәк ҡаҙаныла торған рухи хәл дә. Бәйғәмбәребеҙ һәр ваҡыт Ҡөрьән-Кәримдә нимә яҙылған, шуны эшләгән. Уның әхлағы - ошо изге китап.

Кеше был донъяға имтихан өсөн ебәрелгән. Тимәк, беҙ көн һайын, һәр сәғәт, һәр минут Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында һынау тотабыҙ. Шулай булғас, ни өсөн байлыҡ, дан-шөһрәт артынан ҡыуырға, үҙең өсөн генә йәшәргә? Мөхәммәт бәйғәмбәр һәр ваҡыт: "Өммәтем, халҡым", - тип йәшәгән. Бигерәк тә әлеге ваҡытта миләтебеҙ, илебеҙ әҙәпле, иманлы, тәртипле кешеләргә мохтаж. Шуға күрә беҙ бер-беребеҙҙе хөрмәтләргә, ярҙам

майыр: ул һеҙҙең отошло контракт алыу ихтималлығын да, вазифағыҙ буйынса үрләү мөмкинлеген дә, яңы партнерҙар табыуығыҙҙы ла күҙҙә тота.

***Үгеҙҙең** (1925, 1937, 1949, 1961, 1973, 1985, 1997)* Эт йылы власть башына менеп ултырыу менән күнегелгән тыныс донъяһы дер һелкенер, әйтәгүр. Һәр төрлө ауырлыҡтар, финанс юғалтыуҙар ауыр биреләсәк Үгеҙгә. Апрель-май айҙарында шулай ҙа был мәхшәрҙән башты алып сығып, ниндәйҙер бер күңелле сараға әүрәп алыу ҡамасауламаҫ. Йоҡо режимығыҙҙы, туҡланыуығыҙҙы яйға һалығыҙ. Йән-тәнегеҙгә ҡеүәт алып, яңынан карьерағыҙға тотоноғоҙ, ләкин шикле проекттарҙан һәм кеше иҫәбенә ниндәйҙер уңышҡа өмөт итеүҙән алыҫ булығыҙ. Ноябрь аҙаҡтарына финанс хәлегеҙ яҡшырыр.

***Юлбарыҫ** (1926, 1938, 1950, 1962, 1974, 1986, 1998)* билдәһе яңы йылдың март айҙары ялҡаулыҡҡа һәм еңелсә апатияға бирелер, ләкин биоритмдар тәьҫирендә яҙ уларҙа үҙгәрештәргә ынтылыш уятыр. Ыңғай энергетика финанс уңыштарында сағылыр. Йәй Юлбарыҫтың хис-тойғоларын уғата шаштырып ебәрмәксе, ул үҙенең күптәнге йәшерен һөйөүен белдерергә йөрьәт итер йә булмаһа, тәү күреүҙән "башын юғалтыр". Ни генә булһа ла, көҙгә туйға әҙерләнегеҙ.

***Ҡуян** (1927, 1939, 1951, 1963, 1975, 1987, 1999)* билдәһенә Көнсығыш йондоҙнамә күпселек тормош йүнәлештәрендә уңыш вәғәҙәләй. Карьераһына килгәндә, ул былтыр уҡ яйға һалынған һәм өйрәнелгән юлдан шыуып ҡына бара. Йөрәк эштәрендә - идиллия, ә инде әлегә үҙ яртыларын тапмаған Ҡуяндар ирекле тормош һәм дуҫтары-әхирәттәре менән аралашыуҙан ләззәт таба. Организм ғына һынатмаһын. 2018 йылды ҡаршылаған кистә артыҡ күп ашауҙан һәм араҡы-шарап кеүек спиртлы эсемлектәрҙән һаҡ булыу кәрәк, тип иҫкәртә йондоҙҙар. Йәй тыныс үтәсәк, ә көҙ һыуыҡ тейҙереүҙән һаҡланырға тура килер.

***Аждаһа** (1928, 1940, 1952, 1964, 1976, 1988, 2000)* өсөн проблемалар ғаилә ағзаларының береһе ҡылығынан килеп тыуасаҡ һәм уларҙы Аждаһаның үҙенә хәл итергә тура киләсәк. Марттан алып уның карьера һәм финанс мәсьәләләрендә үҫеш күҙәтеләсәк, тик аҡсаны теләһә нимәгә сарыф итмәй, ҙурыраҡ әйбер алыу өсөн һаҡларға тура килер. Аҡса кәрәккәндә банктарға мөрәжәғәт итмәгеҙ, туғандарығыҙ, дуҫтарығыҙ ярҙамына өмөт итә алаһығыҙ. Ҡышҡы мәлдә карьера мәсьәләһенә иғтибарығыҙҙы тупларға форсат тыуыр.

***Йылан** (1929, 1941, 1953, 1965, 1977, 1989, 2001)* өсөн йәйге айҙарға тиклем матди йәһәттән уңышлы ғына осор көтөлә. Карьера өлкәһендә үҫеш һәм килеменең артыуы март аҙаҡтарына уға торлаҡ хәлен яҡшыртырға, машинаһын яңыртырға һәм сит илгә ялға китергә мөмкинлек бирәсәк. Ә бына яҡындарығыҙ менән мөнәсәбәттәрҙә йыл урталарына тиклем ниндәйҙер көсөргәнешлек булып алыр. Бының нигеҙендә ниҙәр ятыуын төшөнөргә һәм хәлде төҙәтергә тырышығыҙ - оҙаҡ та үтмәҫ, мөнәсәбәттәрегеҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрер.

***Йылҡы** (1930, 1942, 1954, 1966, 1978, 1990, 2002)* йыл башынан уҡ юғары вазифаға үрләүе ихтимал йә булмаһа үҙ эшен асып ебәрергә йөрьәт итер. Әгәр һеҙҙе шәхси бизнес мәсьәләһе күптән борсой икән, уның концепцияһын һәм бизнес планығыҙҙы тәжрибәле һәм был өлкәлә белемле кешеләр менән кәңәшләшеү мотлаҡ шарт. Эт хәүеф тыуҙырыусы сараларҙы яратмай. Яҙ айҙарындағы эш барышы һәм эмоциональ көсөргәнеш Йылҡы иңенә көс еткеһеҙ йөк тейәү менән бәрәбәр булғанлыҡтан, йәйге ялдың файҙаһына үҙегеҙ ҙә инанырһығыҙ.

***Ҡуй (Кәзә)** - (1931, 1943, 1955, 1967, 1979, 1991, 2003)* Эт йылында бизнес өлкәһендә яңы үрҙәр яулаясаҡ. Был эшкә туғандарын, күптәнге дуҫтарын да йәлеп итеү файҙаға ғына булыр. Яңы идеялар килемде арттырырға булышлыҡ итәсәк. Ғаиләлә һүҙһеҙ ҙә аңлап торорҙар. Бер-ике аҙнаға ялға китеү файҙалы булыр.

***Маймыл** (1932, 1944, 1956, 1968, 1980, 1992, 2004)* - тиктормаҫ, шуҡ был билдә эйәләре Эт йылында ултырыр урын тапмаҫ. Көнкүрештә лә, эштә лә улар бер төрлөлөктән тиҙ арый, ләкин тоғро һәм тыныс фиғелле йорт хужаһы йылға "идара" иткәндә Маймыл да үҙен бер аҙ ауыҙлыҡлай алыр. Көҙгә тиклем алыҫ сәфәргә юлланыуҙан, "бөйөк" башланғыстарҙан баш тартып тороғоҙ. 2018 йылдың тәүге өс кварталында ваҡытығыҙҙы күберәк өйҙә, яҡындарығыҙ, дуҫтарығыҙ менән үткәрегеҙ.

***Тауыҡ (Әтәс)** - (1933, 1945, 1957, 1969, 1981, 1993, 2005)* - был билдә эйәләре Эт йылы башланыу менән көҙ айҙарынаса эшкә сумыр, бөтөн көстәрен, дәрттәрен үҙ һөнәрҙәре бейеклектәрен яулауға, оҫталыҡтарын камиллаштырыуға туплар. Фиҙаҡәр хеҙмәт бушҡа китмәйәсәк - Әтәстәр "көрәп" аҡсаһын да аласаҡ. Әйткәндәй, сентябрь-октябрҙә яңғыҙаҡ Әтәстәрҙең мөхәббәт "өйөрмәһе"нә килеп эләгеүе бик ихтимал.

**Әйткәндәй,** гәзит уҡыусыларыбыҙҙа Эт йылын нисек ҡаршылау хаҡында ла һорауҙар тыуыуы ихтимал. Йыл хужаһы бит, күңелен күреп, үҙебеҙгә йылы мөнәсәбәтен уятыу фарыздыр, шәйт. Шулай итеп, Эт тәбиғи төҫтәргә өҫтөнлөк бирә. Өҫтәүенә, ул үҙе лә һары төҫтә була. Шуға күрә, һары, һоро, алтынһыу төҫтәрҙе һайлағыҙ. Әгәр был төҫтәрҙе оҡшатып етмәйһегеҙ икән, әфлисун, гәрсис, хатта ки ҡурай еләге төҫөнә лә туҡтала алаһығыҙ. Ҡаралы-аҡлы гамма ла урынлы булыр. Байрам табынына килгәндә, мотлаҡ итле ризыҡтар әҙерләргә тырышығыҙ. Был Яңы йыл табынында башҡа төрлө ризыҡтарға урын юҡ, тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Балығы ла, йәшелсә һәм емеш-еләге лә, башҡаһы ла үҙегеҙҙең ҡарамаҡта. Ә бына "ҡырын тейәп" алған әҙәмдәрҙе эттәрҙең ене һөймәүе барыбыҙға ла яҡшы мәғлүм. Эттең асыуына теймәйем, тиһәгеҙ, араҡы-шараптан тыйылып торорға кәрәк булыр. Бәлки, йыл буйына ла. Унан, бирһен Хоҙай, эт һөймәгән ул нәмәҫтәкәйҙән башкөллө ҡотолоп та ҡуйырһығыҙ әле. Шулай була күрһен!

**Фирүзә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

итергә, киләһе быуынға күркәм әҙәп ҡағиҙәләрен өлгө итеп ҡалдырырға тейешбеҙ. Киләсәк бит беҙҙең, ошо быуын йәштәренең ҡулында, тимәк, уларҙың яҙмышын уйлау - беҙҙең вазифа. Әгәр ҙә халҡыбыҙ шулай "йәшел йылан" ағыуына бирешеп, вайымһыҙлыҡҡа бирелеп, йәшәүгә дәртен юғалтһа, киләсәктә ни булыр? Был мәсьәләләрҙе айырым бер кеше генә түгел, ә бөтә халыҡ ҡайғыртырға тейеш. Шул ваҡытта ғына милләтебеҙ сәскә атыр.

Эйе, әҙәп булғанда ғына халыҡтар үҫеш юлынан тайпылмай. Исламдың маҡсаты ла кешелекте түбәнселеккә төшөүҙән һаҡлап ҡалыу. Ислам ингәндең тәүге йылдарын алып ҡараһаң, Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәй, тыйғандарынан тыйыла белергә тырышыу мосолмандарҙың йәшәү рәүешен шул тиклем үҙгәртә.

**Ә әҙәпле кешегә ниндәй сифаттар хас һуң? Бына улар:**

Ололарҙы ололау, кеселәрҙе кеселәү.

Ата-әсәне хөрмәтләү.

Етем балаларҙы йәберләмәү.

Исрафҡа юл ҡуймау. Әҙәпле кеше икмәктән ҡойолған валсыҡты ла йыйып ашарға тейеш.

Ашар алдынан да, һуңынан да ҡулдарҙы йыуыу.

Кейемдәрҙе таҙа, бөхтә, матур итеп кейеү.

Дуҫтарыңды хөрмәтләү, кәрәк саҡта терәк - таяныс булыу.

Тоғролоҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, аманат, сабырлыҡ.

Шулай уҡ шишмәләрҙе, йылға-күлдәрҙе ҡарап тороу, юлдарҙы төҙәтеү кеүек әҙәмдәргә файҙалы эштәр өсөн аҡсаһын да, көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәй әҙәпле кеше.

Кеше яңғыҙ йәшәй торған зат түгел. Яңғыҙлыҡ фәҡәт Аллаһы Тәғәләнең булмышы, уға ғына яңғыҙлыҡ килешә. Ә кеше бүтән кешеләр менән даими аралаша, кешеләр менән бергә була, төрлө хәлдәр кисерә. Ҡайҙа ғына булмаһын, берҙән артыҡ булмаған ерҙә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һала торған ҡанундар, ғөрөф-ғәҙәттәр, ҡағиҙәләр барлыҡҡа килә. Ошо аралашыуҙарҙа һәр кемдең күңеленә хуш килерлек, бер кемде лә ҡыйырһытмаҫлыҡ, рәнйетмәҫлек ғәҙел мөнәсәбәттәрҙе булдырыуҙы талап иткән гүзәл әхлаҡ кәрәк.

Быны ҡайҙан табырға мөмкин? Әлбиттә, Ислам динендә. Ғалимыбыҙ Ризаитдин Фәхретдин дә үҙенең нәсихәттәрендә былай ти: "Кешегә мөмкин тиклем үҙенең нәфсеһен насар әхлаҡтан һаҡлау үә яҡшы әхлаҡ менән зиннәтләнеү мөһим. Әгәр ҙә әҙәм балаһының күңеле пак, әхлағы төҙөк булһа, Аллаһы Тәғәләгә булған мөғәмәләләрен дә саф күңел, саф выждан менән үтәр".

Сәхәбәләрҙең һүҙҙәренә иғтибар итәйек:

Ғабдулла бин Ғүмәр: "Әхлаҡлы әҙәмдәрҙең һүҙҙәре ләззәтле, үҙҙәре илгәҙәк булыр", "Яҡшылыҡ - ул башҡаларға асыҡ йөҙлө, татлы телле булыу".

Ғабдулла бин Ғәббәс: "Аҡыллы әҙәм һөйләйәсәк һүҙҙәрен дә уйлағандан, үлсәп ҡарағандан һуң ғына һөйләр", " Әҙәмдәрҙән камил аҡыл булғаны - ауыр ваҡыттарҙа сабыр итә белеүе".

Әҙәп, әхлаҡ тураһында күп миҫал килтерергә була. Ләкин иң мөһиме, уҡыным да оноттом түгел бит, ә уҡыған, өйрәнгәненде үҙеңдең тормошоңда ҡулланыу.

Күркәм әҙәп, камил әхлаҡ беҙҙең халҡыбыҙҙың, рухи тормошобоҙҙоң нигеҙе булып торорға тейеш. Үҙебеҙҙә гүзәл сифаттар тәрбиәләйек, киләсәк быуындарға аманат итеп ошо әҙәп ҡағиҙәләрен һаҡлайыҡ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Күңел тыныслығы нимәгә ул миңә?

Тормошта мөхәббәт күберәк булырға тейеш, тигәндә, берәү ҙә бәхәсләшмәйәсәк, ә ни өсөн эске тыныслыҡҡа ынтылыу кәрәклеген күптәр аңламаясаҡ? Эш шунда: күңелең тыныс булмай тороп, яратыу булмаясаҡ. Мөхәббәт - ул хис-тойғо, яратҡан ир йәки ҡатын түгел. Мөхәббәт - ул хөкөм итмәү. Мөхәббәткә ынтылып, күңел тыныслығы табаһың. Күңел тыныслығын эҙләп, мөхәббәтеңде арттыраһың.

Эске тыныслыҡ - тынысландырыусы дарыу һөҙөмтәһе түгел, ул - күңел тотороҡлолоғо.

Хәрби сәнғәт оҫталығына өйрәнергә теләүсене тәү сиратта күңел тотороҡлолоғон һаҡларға өйрәтәләр. Каратэ оҫталары, яугирҙың көсө - уның күңел тотороҡлолоғо һәм айыҡ аҡыл, тип әйтәсәк. Ярһы, тулҡынлан - бөтөн нәмәне боҙасаҡһың. Гольф уйнаусылар ҙа күңел тотороҡлоғо баһаһын белә.

Шундай һиллектә йәки күңел тыныслығында беҙ көс йыябыҙ. Әммә тыныс булыу аяҡ өҫтө йоҡлау тигәнде аңлатмай. Үҙ-үҙең менән тыныслыҡта булыу, тимәк, теләһә ниндәй хәл-торошҡа яраҡлаша белеү, ә уларға ҡаршы көрәшеү түгел. Күңел тыныслығы - тормош картинаһын тулыһынса күреү, ә уның айырым деталдәренә иғтибар биреү түгел.

## Бурысымды түләп бөткәс, тынысланасаҡмын...

Кемдер: "Бына башта бурыстарымды түләп бөтәйем дә, һуңынан тыныслыҡ эҙләй башлармын", - тиер. Теоретик яҡтан ҡарағанда дөрөҫ һымаҡ, әммә ғәмәлдә бынан бер яҡшы нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Ни өсөн? Сөнки беҙ был донъяға ипотека түләү йәки бассейныбыҙ күршебеҙҙекенән ҙурыраҡ булһын өсөн тырышыу өсөн тыумағанбыҙ.

Беҙ был донъяға бер-беребеҙгә ярҙам итеү өсөн килгәнбеҙ. Ошо хаҡта онотмаҫ өсөн тормош ике күрһәтмә әҙерләгән:

- Башҡаларға ярҙам иткәндә бәхет тулҡындарына күмеләбеҙ.
- Үҙебеҙ тураһында ғына уйлағанда, үҙ именлегебеҙҙе, хәүефһеҙлегебеҙҙе ҡайғыртҡанда, яңғыҙлыҡ тойғоһо кисерәбеҙ.

Ғөмүмән, хәүефһеҙ һәм тыныс йәшәү өсөн икенсе берәй планета эҙләргә кәрәк. Иртәгәһе көнгә ышаныс бары тик үҙебеҙҙә генә булыуы мөмкин, ә тышҡы донъяның тотороҡлолоғо тураһында һүҙҙәр - улар барыһы ла әкиәт. Банктар бөлә, компаниялар тарҡала, самолеттар ҡолай.

Ошондай ышанысһыҙ донъяла нисек йәшәргә? Уны нисек бар - шулай ҡабул итергә. Ундағы тормоштан ҡәнәғәтлек алырға. Тормошҡа төкөрөп ҡарарғамы, тиерһегеҙ? Юҡ, был бары тик прагматизм ғына. Ерҙә йәшәүе хәүефле, көн һайын күпме кеше вафат була. Әммә был ғүмер буйы ҡурҡып йәшәргә кәрәк тигәнде аңлатмай!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

**Башҡорт телендәге аҙналыҡ “Киске Өфө” баҫмаһы милли рухты һәм аң тәрәнлеген һанлаған, сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш ул. Артабан да бергә булайыҡ!**

www.kiskeufa.ru

Киске Өфө

Индексы - 50665




450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
(347) 253-25-44, 246-03-23, kiskeufa@mail.ru

# 2018

**ҒИНУАР - ҺЫУЫҒАЙ**

| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |

**ФЕВРАЛЬ - ШАҠАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | | | | |

**МАРТ - БУРАНАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | |

**АПРЕЛЬ - АЛАҒАРАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | | | | | | |

**МАЙ - ҺАБАНАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |

**ИЮНЬ - ҺӨТАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | |

**ИЮЛЬ - МАЙАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |

**АВГУСТ - УРАҒАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | | |

**СЕНТЯБРЬ - ҺАРЫСАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |

**ОКТЯБРЬ - ҠАРАСАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |

**НОЯБРЬ - ҠЫРПАҒАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | | |

**ДЕКАБРЬ - АҠЪЮЛАЙ**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
| 31 | | | | | | |
| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ЗАМАН БАШҠОРТТАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**51-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ғәбитов. Радик. Иҫәнғол. Бром. Әкәмәт.Сталлоне. Лавр. Ике. Кендек. Тавро. Түмәр. Күркәм. Күзбәков. Нурсолтан. Заты. Аныҡ. Реал. Ҡарт. Нужа. Наян.

**Вертикаль буйынса:** Солтанов. Благовещен. Оскар. Импорт. Сурина. Тыз. Берләштереү. Талҡан. Ғилми. Кран. Вәкәләтлек. КВН. Ҡатын. Нәргиз. Мөрид. Түлек. Майы.

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

## БАЛЫҠСЫЛАРҘЫ ҺӘМ...

Республикала һауа температураһының түбәнәйеүенә бәйле күлдәрҙең, быуаларҙың, һыу ятҡылыҡтарының туңыуы күҙәтелә. Йыл һайын йоҡа боҙ кешеләрҙең үлеменә сәбәпсе була. Балалар һәм балыҡсылар йыш ҡына стихия ҡорбандарына әүерелә. Ә бит хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәгәндә бәхетһеҙлек осраҡтарына юл ҡуймаҫҡа ла мөмкин.

Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында ҡышын балыҡ тоторға яратыусыларҙы, 10 сантиметрҙан ҡалын булған боҙға ғына сығырға мөмкин, тип иҫкәрттеләр. "Боҙҙоң ҡалынлығын уның төҫөнә ҡарап белергә мөмкин: зәңгәр төҫтәге боҙ - ныҡлы, ә бына аҡ төҫтәгеһе ышаныслыһыҙ. Күкһел, аҡһыл йәки һарғылт төҫтәге боҙҙоң бер ҙә ышаныслығы юҡ - шатырлап тормай емерелә. Тәүлектең ҡараңғы ваҡытында йәки насар күренгәндә боҙға сығыу бөтөнләй тыйыла", - тип аңлатты ғәҙәттән тыш **ведомство белгестәре һәм тағы шундай кәңәш бирҙеләр:**

- аяҡ аҫтында боҙ шытырлай башлаһа, шунда уҡ хәүефле урындан китергә, айырыуса ҙур ҡурҡыныс янаған осраҡта боҙға ятып, кире йүнәлештә шыуышырға кәрәк;
- балыҡ тотоу сәйәхәтенә яңғыҙ йөрөмәгеҙ;
- боҙҙа һәр аҙымығыҙҙы осло башлы таяҡ менән тикшерегеҙ, ләкин алдығыҙҙағы боҙға һуҡмағыҙ, иң яҡшыһы - ситкә һуғыу;
- башҡа балыҡсыларға өс метрҙан да яҡынараҡ килеү тыйыла;
- боҙға ҡуша туңған ағас төптәренә, ылымыҡтарға яҡын бармағыҙ;
- мәкенән һыу фонтан кеүек урғыла башлаһа, хәүефле урындан тиҙ генә китергә кәрәк;
- страховка һәм ҡотҡарыу сараларының булыуы мотлаҡ (ауыр йөк эленгән бау йәки киң таҡта);
- балыҡ тотҡанда иҫерткес эсемлектәр ҡулланырға ярамай.

## ...РУЛДӘГЕЛӘРҘЕ

Башҡортостан Дәүләт автоинспекцияһы федераль һәм республика трассаларында боҙлауыҡ булғанда, буран сыҡҡан осраҡта водителдәрҙе тиҙлек режимын үтәргә, ҡатмарлы юл шарттарында иғтибарлы һәм һаҡсыл булырға саҡыра.

"Тайғаҡ юлда киҫкен хәрәкәт итмәҫкә, кәрәкһеҙ юл һыҙатын алмаштырырға, рөхсәт ителгән урындарҙа ғына уҙырға кәңәш ителә. Айырыуса бер ағым булып хәрәкәт иткәндә транспорт саралары араһында хәүеф-хәтәрһеҙ арауыҡ һаҡлау һәм уны арттырыу мөһим", - тип кәңәш бирҙеләр ЮХХДИ идаралығында. **Водителдәргә һәм йәйәүлеләргә киләһе юл участкаларында үтә иғтибарлы булыу зарур:**

- Мәскәү - Өфө: Подымалово сиселеше, Шәрип һәм Исәмәт тораҡ пункттары эргәһендә.
- Өфө - Һамар: Ҡандра ауылы, Жуков сиселеше, Бишҡурай һәм Бүздәк ауылдары янында.
- Өфө - Ырымбур: Боҙаяҙ, Стәрлебаш, Талбазы һәм Ергән ауылдары тирәһендә.
- Өфө - Силәбе: Зинино - Жилино һәм Алаторка ауылдары сатында.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (21) дүшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 9 (22) шишәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 10 (23) шаршамбы | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |
| 11 (24) кесе йома | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:41 | 17:11 | 18:41 |
| 12 (25) йома | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:43 | 17:13 | 18:43 |
| 13 (26) шәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 14 (27) йәкшәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6-8 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 11.00, 13.00 0+

**6 ғинуар "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**7 ғинуар "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия 16+

**8 ғинуар "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**12 ғинуар "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6-7 ғинуар "Щелкунчик"** (Н. Соболева), Яңы йыл әкиәте. Башлана 10.30, 13.00; **8 ғинуар** - 13.00 0+

**6-7 ғинуар "Пес Барбос и новогодний кросс"** (И. Казакова), бәләкәстәр өсөн Яңы йыл әкиәте. Башлана 12.00, 14.00 0+

**6 ғинуар "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6-8 ғинуар "История одной снежинки"** (В. Аношкин), Яңы йыл спектакле. Башлана 11.00, 14.00, 17.00 0+

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# БӘХЕТТӘР ТЕЙӘП КИЛҺЕН...



**Киләһе йыл - көнсығыш календаре буйынса эт йылы. Йыл бөтөн йәһәттән дә тыныслыҡ һәм гармония осоро буласаҡ, дәүләттәр үҙ-ара берләшәсәк, ул һәр кемгә уңыш килтерәсәк, ти белгестәр. Ә ошо йылда тыуғандар йылға ниндәй өмөттәр бағлай икән? Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры актрисаһы Альбина ДӘҮЛӘТБӘКОВА менән ошолар тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

**Альбина, сәхнәлә эт ролен башҡарғанығыҙ бармы?**

- Театр сәхнәһендә мин хәҙер 11 йыл. Быйыл бала ҡарау ялынан эшкә сығып, ҙур теләк һәм илһам менән ижади мөхиткә сумып йөрөгән мәлем. Спектаклдәрҙә, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ актрисалар башҡарған йәнлектәр - ҡуян, сысҡан, төлкөләрҙе уйнағаным бар, ә бына эт образы әләккәне булманы. Ә бына ялға китергә йыйынған мәлдә Яңы йыл тамашаһында мин эт булып уйнағайным. Быйыл да ошондай уҡ шыршы байрамында эт ролен башҡарам.

Беҙҙең театр бик үҙенсәлекле, беҙ ҡурсаҡтар менән эшләйбеҙ. Ҡурсаҡ сәхнәлә терелеп, йәшәп китһен өсөн уға актерҙың хис-тойғоһо күсергә тейеш. Ҡорған артында - үҙең, ҡорған өҫтөндә ҡурсағың уйнай. Шуға ла артист ихласлыҡ, мөғжизәгә ышана белеү кеүек сифаттарға эйә булырға тейеш. Ғөмүмән, бөгөнгө балалар башҡараҡ, улар күпте белә, бер нәмәгә лә аптырап бармай, бер урында оҙаҡ ултырып сыҙамай. Ошоларҙы иҫәпкә алып, төрлө ысулдар ҡулланып ижад итергә тырышабыҙ. Авансценала актер үҙе сығып күренеп, шунан ғына ҡорған артына инеп, ҡурсаҡ булып уйнай ала йәки башҡа берәй сара уйлап табыла. Тамашасыларыбыҙ үҙемдең ҡыҙым һәм улымдың йәштәштәре, шуға ла әсәй булараҡ, уларҙың нимә уйлауҙарын, нимә тураһында хыялланыуҙарын, нимәгә ышаныуҙарын беләм, тип әйтә алам. Улар менән бер тулҡында булғанда, актерға эшләүе еңелерәк.

**Йондоҙнамәгә ышанаһығыҙмы? Эт йылында тыуғандарға ниндәй сифаттар хас?**

- Һәр көнгә тәғәйенләнгән йондоҙнамәләргә бөтөнләй иғтибар бирмәйем. Ә бына ошо көнсығыш йондоҙнамәһенә ышанам. Үҙемдең йылымды һәм үҙемде белгән кеше булараҡ, ысынлап та, ниндәй йылда тыуыуың һинең холҡоңда ла сағыла икәнен беләм. Этте ниндәй тип беләбеҙ? Ул хужаһына тоғро, дуҫ була белә. Унан һуң, был йылда тыуғандарға яуаплылыҡ, әйткән һүҙенә тоғро булыу хас. Эш яратабыҙ, үҙебеҙ өсөн ҡәҙерле булғандарға, ихтирам иткән кешеләребеҙгә тоғробоҙ. Мин нимәлер эшләргә вәғәҙә иткәнмен икән, был үҙемә нисек кенә ҡыйынлыҡтар тыуҙырмаһын, барыбер үтәп ҡуям. Эт йылында тыуғандарҙың барыһында ла күҙәтелә ошо сифаттар, шуға ла йылдың кешенең холоҡ-ҡылығына йоғонтоһо барҙыр.

**Яңы йылда ижадта, шәхси тормошта нимәләр көтәһегеҙ?**

- Һәр йылға тик изге ниәттәр, теләктәр, өмөттәр менән аяҡ баҫаһың бит ул. Үҙемдең йылым да булғас, ул миңә икеләтә уңыштар килтерер, тигән өмөттәмен. Эшемде һағынып өлгөргәйнем, көс тә, дәрт тә, эшләргә ынтылыш та бар һымаҡ, шуға ла ижади яҡтан бай булыр, тип уйлайым. Ғаиләм - ысын мәғәнәһендә ҡәлғәм, был йыл бәхеттәре менән килһен. Яҡты уйҙар менән йәшәйек, милләттәштәр, шул саҡта тормошобоҙ ҙа күркәм булыр. Сөнки һиңә әйләнеп ҡайтҡан ваҡиғалар - улар барыһы ла үҙебеҙҙең уйҙарҙың сағылышы, тормошҡа нимә бирәһең, шуны алаһың. Яңы йыл ҡотло булһын!

**Ләйсән НАФИКОВА әңгәмәләште.**

ШИҒРИ ТЕЛӘК

*Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА*

## ЯҢЫ ЙЫЛДА...

Өйләнеү - ул өй һүҙенән,
Өйһөҙҙәргә өй теләйем.
Өй эсендә етеш тормош,
Татыулыҡ һәм көй теләйем.
Бәхеткә бәхет өйөлһөн -
Ырыҫһыҙға бол теләйем.
Сырхауҙарға сәләмәтлек,
Моңһоҙҙарға моң теләйем.
Балһыҙҙарға бал теләйем,
Тоҙһоҙҙарға тоҙ теләйем -
Ниндәйҙер бер тәм теләйем!
Һүнгәндәргә ҡуҙ теләйем!
Йәрһеҙҙәргә йәр теләйем,
Ҡотһоҙҙарға ҡот теләйем.
Күңелдәргә ниндәйҙер бер
Янып торған ут теләйем.
Тилмергәнгә - сабырлыҡтар!
Аңға килһен тилергәндәр.
Төйәк тапһын сит яҡтарҙа
Илдәренән тибелгәндәр.
Таш атырға баш кәрәкмәй -
Баш теләйем башлыҡтарға.
Йомшаҡланһын таш бәғерҙәр -
Һыу теләйем ташлыҡтарға.
Нимә етмәй, шуны телә,
Дошман түгел, дуҫ телкәйем.
Тыныслыҡтар етмәй беҙгә -
Имен булһын был еркәйем.
Юл теләйем аҙашҡанға,
Мөмкинлектәр - эҙләүсегә.
Оҙон-оҙон ғүмер бирһен,
Йәшәйһе бар, тиеүсегә.
Аҙғандарға - тотанаҡлыҡ,
Бәйеләнә ип теләйем,
Мөхәббәттә йәшәһендәр,
Һөйә белһендәр, тиәйем.
Егет булып ҡалһын ирҙәр,
Намыҫ менән уйнамайса.
Ауырымай үлмәгеҙ тик -
Һөйләмәгеҙ уйламайса.



* * *

*Фирүзә АБДУЛЛИНА*

## ЯҢҒЫҘ ҠАРШЫЛАМА!

Яңы йылды яңғыҙ ҡаршылама -
Яңғыҙлыҡтан Хоҙай һаҡлаһын!
Кем ҡаҡһа ла ҡаҡһын ишегеңде,
Тик яңғыҙлыҡ ҡына ҡаҡмаһын!

Яҡындарың килеп шаҡыһындар -
Яратҡанын һиңә белдереп,
Дуҫтар-әхирәттәр килеп баҫһын,
Юҡ-бар һөйләп, көлөп-көлдөрөп!

Таныштарың инеп ҡотлап сыҡһын,
Инһен әйҙә таныш түгелдәр,
Тик бикләмә, зинһар, йөрәгеңде -
Бәхетле тик асыҡ күңелдәр!

Һаулыҡ, байлыҡ, шатлыҡ инеп тулһын,
Түрҙән урын алһын мөхәббәт,
Ихтирамды, иғтибарҙы индер,
Булһын бергә иман, мәрхәмәт.

Күңелең дә, асыҡ ишек кеүек,
Бикләнмәһен бер үк йоҙаҡҡа,
Яңғыҙлыҡта бер аҙ ял ит, ләкин
Аҙға ғына, түгел оҙаҡҡа!

Яңы йылды яңғыҙ ҡаршылама -
Яңғыҙлыҡтан Хоҙай һаҡлаһын!
Изге уйҙар, ғәмәлдәрең өсөн
Фәрештәләр һине яҡлаһын!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# СӘСКӘҺЕНӘ АЛДАНЫП...

## сәнскәгенә ҡаҙалма

Аҡылһыҙҙан алты тапҡыр маҡталғансы, аҡыллынан бер тиргәл.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер ҡасан да уңышһыҙлыҡтарға ҡаршы сыҡма. Тик кенә ултыр һәм ундан туғыҙ уңышһыҙлыҡ һине ары уҙып ҡына китер.

**(Калвин Кулидж).**

Реклама - ул кеше бөтөнләй ишетмәгән, белмәгән тауарҙың тиҙ арала бик тә мөһим, кәрәкле булып китеү ысулы.

**(Мартти Ларни).**

Статистика буйынса, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда күберәк йәшәй. Быға аптырарға түгел: ҡатын-ҡыҙҙар утыҙ йәшкә еткәнсе лә әллә күпме ваҡыт үтә.

**(Бинг Кросби).**

Был хеҙмәтемде мин Леонор исемле ҡыҙыма бағышлайым. Уның ярҙам, дәртләндереүҙәре булмаһа, китабымды ике тапҡырға тиҙерәк яҙып бөтөр инем.

**(Пэлем Вудхауз).**

Үҙеңде бәхетле булған кеүек тот, һәм ысынлап та бәхетлерәк булып китерһең.

**(Дейл Карнеги).**

Дуҫтарыңды һаҡлап ҡалырға теләһәң, улар менән күрешмәҫкә тырыш.

**(Тристан Бернар)**

Иҫтәлектәрең күберәк булған һайын, хыялдарға урын әҙерәк ҡала бара.

**(Януш Васильковский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт һунарға сығып китә лә, өс көндән егет булып ҡайтып инә. Әбейе уны танымай тора хатта. Бабай хәлде һөйләп бирә:**

**- Бер шишмә янына барып сыҡтым да, һыуын эсә торғас, үҙемдә әллә ниндәй үҙгәреш була башлауын тойҙом. Һыуҙағы сағылышыма ҡараһам, йәшәрә барам икән. Һине осратҡан саҡтағы йәшемә еткәс, һыу эсеүҙе туҡтаттым. Хәҙер бына һине лә шул шишмәгә ебәрергә тип ашығып ҡайттым, - ти бабай.**

**Әбейе ашығып ҡына сығып китә. Ҡайтмай ҙа ҡайтмай икән. Бабай борсолоп, теге шишмә янына барһа, унда бер бәпес илап ята, ти. Әбей һыуҙы самаһыҙ эсеп ташлап, бәпескә әйләнгән икән. Бабай уны өйөнә алып ҡайтҡан. Әммә күпме генә тәрбиәләмәһен, күпме генә ваҡыт үтмәһен, был сабый үҫмәй ҙә үҫмәй икән... Нәфсе тигәнең шулай харап итә шул..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 2671/12